*Кеше тәбиғәте шундай: вәғәҙәләр бирергә ярата. Ләкин үтәлмәгән вәғәҙәләр, хатта улар бик бәләкәй һәм әһәмиәтһеҙ генә булһа ла, һеҙҙең холоҡ-фиғелде, рухиғыҙҙы, бәйләнештәрегеҙҙе ярлыландыра икәнен беләһегеҙме икән? Үҙ яуаплығығыҙға алған һәр йөкләмә, һәр вәғәҙә менән һеҙ үҙ-үҙегеҙ һәм кешеләр араһындағы бәйләнеште юҡҡа сығараһығыҙ. Тимәк, вәғәҙә бирер алдынан ете ҡат уйларға кәрәктер...*

**Робин ШАРМА.**




ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№29 (603)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Башҡорт балы илде данлай,**

йәғни Бөрйәндә үткәрелгән матур сара тураһында бер кәлимә



5-6

**Ҡатайҙар Ҡараһаҡал яуында**



7

**Кешеләрҙе иманға саҡырам -**

һәр кем Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә өлгәшһен, әйҙә!



8-9

**Яратҡан һөнәреңде тап...**

һәм һин бер көн дә эшләмәҫһең



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Ураҙа диндең биш терәгенең береһе булған фарыз ғәмәл. Әммә уның сәләмәтлек өсөн дә файҙалы булыуын беләһегеҙме?*

*Айҙар ҠУСӘЕВ, эшсе:* Ураҙа тотоуҙы ҡайһы берәүҙәр ас йөрөү тип кенә аңлай, ә ысынында был ғәмәлдең мәғәнәһе бик тәрән. Мин уны таҙарыныу ғәмәле, тип аңлайым. Кешенең организмы ла, уйҙары ла, йөрәге лә йыл әйләнәһендә төрлө бысраҡ ҡалдыҡтар менән тула, ә Изге Рамаҙан айында уларҙан ҡотолоу өсөн яҡшы мөмкинлек бирелә. Ураҙа тотоп та, ғәйбәт һөйләүселәрҙең, насар эштәренән тыйылмаусыларҙың ғәмәле ғибәҙәт булараҡ ҡиммәтен юғалта, бары асығыу ғына булып ҡала, тип әйтелә хәҙистәрҙә. Яҡшы эштәрҙә ныҡышмаллыҡ күрһәтергә, яҡшы уйҙа булырға, насар сифаттарҙы ауыҙлыҡларға, йөрәк сирҙәренән таҙарынырға саҡырыла ошо ай ваҡытында. Ашамау-эсмәү ураҙаның бер өлөшө генә, тәү сиратта кеше рухи яҡтан таҙарына.

Икенсе бер хәҙистә, кеше ҡарынын өс өлөшкә - бер өлөшөн аҙыҡҡа, икенсеһен һыуға, өсөнсөһөн һауаға бүлергә, йәғни буш ҡалдырырға тейеш, тип әйтелә. Ғөмүмән, динебеҙ бүреләй туҡланыуҙы хупламай. Бының үҙ хикмәте бар. Туҡланғанда төрлө ағзаларыбыҙ эшкә егелә, организм насар ҡабул иткән йәки артыҡ күп аҙыҡтан уларға көсөргәнеш төшә һәм ағзаларға зыян килә, төрлө ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Тән ял итеп торһа, һис шикһеҙ, файҙаға ғына була. Әле ураҙа ваҡыты бик оҙон булғас, тән дә оҙағыраҡ ваҡыт ял итә ала. Ашҡаҙанға аҙыҡ килмәй торғанда ағзалар организмда тупланған кәрәкмәгән матдәләрҙе эшкәртә башлай һәм шуның менән уның таҙарыныуына булышлыҡ итә.

Мин вегетариансы, мосолман кешеһе өсөн ит ашамау сәйер күренһә лә, үҙем ошо юлды һайланым. Аҙыҡ ни ҡәҙәре еңелерәк эшкәртелә, ул организм өсөн шул тиклем файҙалыраҡ, яҡшыраҡ, тип иҫәпләйем. Шуның менән ул тән ағзаларын артыҡ көсөргәнештән һаҡлай. Ысынлап та, вегетариансыларҙың сәләмәтлеге ныҡ була, кеше тәбиғи йәшенә ҡарағанда аҡрыныраҡ ҡартая. Әммә вегетарианлыҡты камиллашыуҙың бер баҫҡысы ғына тип һанайым. Ҡөрьәндә Аллаһы Тәғәләнең фәрештәләргә Әҙәмгә баш эйергә бойороуы хаҡында әйтелә. Ә фәрештәләр нәфсеһеҙ, насарлыҡтарҙан азат, ашамаған, эсмәгән таҙа заттар. Улар кешегә баш эйәләр, уның өҫтөнлөгән таныйҙар. Әлбиттә, был өҫтөнлөк иң тәүҙә кешенең камил зат булараҡ Аллаһы Тәғәлә алдындағы ғибәҙәттәре менән яуланалыр. Әммә ошо мәсьәләнең икенсе яғы ла бар. Кеше фәрештәләрҙән тышҡы сифаттары, ашамауы-эсмәүе менән дә өҫтөн булала алалыр. Ураҙа ошо өҫтөнлөккә өлгәшеүҙәге бер исулдыр.

*Марат ФӘТХЕТДИНОВ, студент:* Көнө буйына аҙыҡтүлектән тыйылып йөрөүҙең файҙаһы күп. Иң тәүҙә, фарыз ғәмәл булыуҙан тыш, ураҙа кешенең нәфсеһен тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнай һәм уның рухи бейеклеккә күтәрелеүе өсөн сәбәпсе була, шулай уҡ сәләмәтлеккә лә ыңғай яҡтан йоғонто яһай. Беҙҙең тәндә, уның эшмәкәрлеге өсөн файҙалы булған мат-дәләрҙән, витаминдарҙан тыш, кәрәкмәгән аҙыҡ ҡалдыҡтары ла йыйыла. Ураҙа ваҡытында улар организмдан сығарыла. Бынан тыш, аслыҡ тойғоһон кисергән организм тәнде холестериндан таҙарта. Ҡан тамырҙары йомшара, ҡан баҫымы төшә. Кеше организмында зур вазифа үтәгән бауыр, бер нисә сәғәткә туҡланыуҙан тыйылыу сәбәпле, ял итеү мөмкинлеге ала. Шулай уҡ бөйөрҙәр ҙә ял итә. Ас булған ваҡытта кешенең мейе күҙәнәктәре үҫә башлай, кешенең фекерләү ҡеүәһе арта, уның хәтере яҡшыра. Ураҙа организмға кәрәкмәгән һәм иҫке күҙәнәктәрҙән таҙарыныуға ла булышлыҡ итә. Бигерәк тә ашҡаҙан, эсәктәр өсөн файҙалы ураҙа. Сөнки улар йыл әйләнәһенә бер туҡтауһыҙ тиерлек эшләй, ә ураҙа ваҡытында күпмелер ваҡытҡа булһа ла ял итәләр. Был ошо ағзаларҙың эшмәкәрлек осорон оҙайта. Әлбиттә, дөрөҫ туҡланыу хаҡында ла онотторға ярамай. Әгәр ҡояш байығас та ҡулға эләккән бөтә нәмәне ҡомһоҙланып ашай башлаһаң, киреһенсә, ашҡаҙанға көс төшөүе мөмкин. Шуға ла сманы белеү мөһим.

Ураҙа инфаркт, һимереү, шәкәр диабетынан, бауырбөйөр менән бәйле башҡа күп ауырыуҙарҙан, ҡан тамырҙары ҡатыуҙан һаҡлай. Кешенең тәнендә тәбиғи баланс булдыра.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# НУРЛЫ БАЛА САҠТЫҢ...

## осҡонло миҙгеле ул “Байыҡ”



Бәйгенең еңеүселәре - “Ирәндек” халыҡ бейеүҙәре ансамбле.
Материалды 11-16-сы биттәрҙә уҡығыҙ.

✓ *Совет заманында һәр эште контролдә тоттолар, тип тәнҡитләргә ярата-быҙ. Тик хөкүмәт контроле - ул эшкә аяҡ салыуҙы түгел, ә етәкселәр тарафынан бар нәмәнең иҫәпкә алыныуын һәм кәрәк саҡта ярҙам итеүҙе күҙаллай ине.*



*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ТЕХНИКА МЕНӘН ДУҪҺЫҢМЫ?



**"Мәшәҡәтең булмаһа, машина һатып ал", тигән шаяртыу бар. Уның хаҡ булыуын еңел машинаға эйә булыусы һәр кем тиҙ аңлай. Ысынлап та, көндәр-айҙар дауамында эҙләп, үҙеңә бар йәһәттән дә тап килгән машина һатып алыу менән генә эш бөтмәй. Хыялыңдағы "тимер ат"ҡа эйә булып, уны йүгәнләп юлға сығыр алдынан төрлө мәшәҡәттәрҙе йырып сығаһы бар. Улар исемлегенә автомобилде ЮХХДИ-ла иҫәпкә ҡуйыу, дәүләт номеры алыу, машина салонын кәрәкле әйберҙәр менән тулыландырыуҙан тыш, автосигнализация урынлаштырыу ҙа инә.**

Мин нәҡ ошо хеҙмәтте күрһәтеп аҡса эшләйем. Көн һайын меңәрләгән кеше еңел автомобиль һатып ала һәм уларҙың 90 проценты беренсе көндә үк машинаһын урлап алып китеүҙән һаҡлау маҡсатында автосигнализация ҡуйҙыра. Шуға күрә, бер ҡасан да эшһеҙ булғаным юҡ. Хатта өлгөрмәгән саҡтарым да йыш була.

Автосигнализация ҡуйыу - тейешле элементтарҙы урынлаштырыу һәм уларҙы дөрөҫ тоташтырып сығыу ғына түгел. Бындай эштә барлыҡ нескәлектәрҙе лә белеү һәм күҙ уңында тотоу мөһим. Шуға күрә, был өлкәлә оҫта булып китеү өсөн ваҡыт һәм тәжрибә кәрәк. Ғөмүмән, был эшмәкәрлек - ижади процесс һәм уның уңышлы булыуы ҡуйыусының квалификацияһына бәйле. Квалификация юғары булған һайын, автосигнализацияның дөрөҫ итеп ҡуйылыуына, тимәк, машинаның бурҙар ҡулына эләкмәүенә ышанырға була.

Миңә әлеге ваҡытта 35 йәш һәм уның 20 йылын мин ошо өлкәне үҙләштереүгә һәм өйрәнеүгә сарыф иттем. Эштең оҫтаһы булыу өсөн бар тырышлығымды, көсөмдө һалдым, ваҡытымды йәлләмәнем һәм бөгөн уларҙың файҙаһын күрәм. 15 йәшемдә беренсе тапҡыр дуҫымдың атаһы тотҡан автомобиль йүнәтеү оҫтаханаһында уның автосигнализация ҡуйыуын күрҙем һәм миндә лә үҙемде ошо эштә һынап ҡарау теләге тыуҙы. Ағай менән һөйләшеп килештем дә, көн дә ике-өс сәғәтемде уның янында үткәрә башланым. Әлбиттә, бер кем дә миңә шунда уҡ яуаплы эште ышанып тапшырманы, мин кәрәкле деталдәрҙе "алып килеүсе - алып китеүсе" булып йөрөнөм. Ләкин һәр ваҡыт эштең барышын иғтибар менән күҙәтеп, ҡуйыусының әйткәндәрен тыңлап, күңелемә һеңдереп барҙым. Оҫтаханала юғалып, "ваҡытымды бушҡа уҙғарып" йөрөгән өсөн атай-әсәйҙән күп әләкте, тик мин көн дә унда барыуымды дауам иттем. Яйлап, автосигнализация ҡуйыуҙы, ҡаты контроль аҫтында булһа ла, миңә лә ышанып тапшыра башланы ағай. Шуға күрә, Өфөгә уҡырға килгәндә мин был өлкәне һәйбәт белә инем. Университеттың икенсе курсында ошондай эшмәкәрлек алып барыусы компанияға ярҙамсы булып эшкә урынлаштым һәм ҡулыма диплом алғансы, унда белемемде камиллаштырҙым. Әлеге ваҡытта һөнәрем буйынса рәсми эшләйем, ә автосигнализация ҡуйыу өҫтәмә килем килтереүсе яратҡан шөғөлөм.

Ир-егеттәрҙең күбеһе техника менән дуҫ, ләкин бик һирәктәре генә был өлкәләге белемдәрен аҡса сығанағы итеү яйын таба. Минең яҙғандарҙы уҡығас, ошо юл менән аҡса эшләй башлаусылар булырына ышанам. Бигерәк тә әлеге ваҡытта мәктәптә, училище йәки башҡа уҡыу йортонда белем алып йөрөүсе егеттәргә ошо өлкәне бер-нисә йыл ныҡлап өйрәнергә һәм уңайы сыҡҡанда эш башларға тәҡдим итәм. Ләкин беренсе заказығыҙҙа уҡ үҙегеҙҙең эшкә яуаплы ҡарауығыҙҙы һәм уны сифатлы итеп башҡарыуығыҙҙы күрһәтеү мөһим. Шул саҡта ғына уңыш һәм аҡса киләсәк.

**Сәлим ИМЕЛБАЕВ,
Өфө ҡалаһы.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАҘАР ШАРТТАРЫ...

## берҙәмлектән яҙҙырҙы

**Сәлих ХӘЙРУЛЛИН, Бәләбәй районы һәм ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе:** Заман ауыр, тибеҙ ҙә, иңебеҙгә төшкән бар проблемаларҙы ошо ауырлыҡҡа һылтайбыҙ. Һәр осорҙоң үҙ ҡыйынлыҡтары була инде ул. Ә шулай ҙа оҙаҡҡа һуҙылған баҙар шарттарына күсеү процесы халҡыбыҙҙы тарҡауландырҙы. Кешеләр бер-береһенә ярҙам итеү, ҡатнашып йәшәү урынына үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртыуҙы өҫтөн ҡуя башланы. Берәй ойошмаға, етәкселәргә мөрәжәғәт итһәң, барыһы ла мәсьәләне аҡса ярҙамында сисергә тәҡдим итә. Донъя тик аҡсанан ғына тормай, унда кешеләр араһындағы мөнәсәбәт, рухи бәйләнеш тә мөһим роль уйнарға тейеш тә һуң. Әммә ошо хәҡиҡәт хәҙер бер аҙ бүҫкәрә төштө.

Халыҡтың милли үҙаңын формалаштырыусы, рухын күтәреүсе, күңел талаптарын ҡәнәғәтләндереүсе тәү сығанаҡ - ул киң мәғлүмәт саралары. Мин башҡортса баҫмаларҙы даими рәүештә күпләп алдырам. Әммә һуңғы ваҡытта гәзит-журналдар үҙ уҡыусылары менән бәйләнеште һүлпәнәйтте, уларҙы йәлеп итеү сараларын йомшартты, тип уйлайым. Радио тыңлаһаң, телевидение ҡараһаң, тормошобоҙ йыр ҙа бейеүҙән генә тора, донъябыҙ түңәрәк, тигән һығымтаға киләһең. Ҡайһы бер гәзиттәрҙә мәғлүмәтте тәүге һәм аҙаҡҡы биттәрендә генә уҡырға була, уртаһында йә ҙур отчет, йә ниндәйҙер рәсми документ. Халыҡтың үҙәгенә үткән проблемаларҙы күтәргән, уның мәнфәғәттәрен ҡайғыртҡан мәсьәләләр бөтөнләй күтәрелмәй. Ҡайһы саҡта бер-ике фермер тураһында яҙалар ҙа, шуның менән эш тә бөтә. Фермерлыҡ беҙҙе туйҙырмаясаҡ, был хужалыҡтың бер формаһы ғына. Рәсәйҙә ғүмер баҡый коллектив хужалыҡтар булған, булырға тейеш тә. Халыҡҡа бына шул хаҡта еткерергә кәрәк.

Беҙ алфавиттың "А" хәрефен генә өйрәнгәнбеҙ ҙә, шул белем менән китап уҡырға тотонғанбыҙ кеүек. Совет заманында һәр эште контролдә тоттолар, тип тәнҡитләргә яратабыҙ. Тик хөкүмәт контроле - ул эшкә аяҡ салыуҙы түгел, ә етәкселәр тарафынан бар нәмәнең иҫәпкә алыныуын һәм кәрәк саҡта ярҙам итеүҙе күҙаллай ине. Бөгөнгө көндә беҙгә бына ошондай ярҙам етмәй, илдең хәлен яҡшыртыу өсөн тырышлыҡ етмәй.

**Камилә ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Ураҙа диндең биш терәгенең береһе булған фарыз ғәмәл. Әммә уның сәләмәтлек өсөн дә файҙалы булыуын беләһегеҙме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ, журналист:*** Мөхәммәт бәйғәмбәр бер хәҙисендә, "Ураҙа тотоғоҙ һәм һеҙ сәләмәт булырһығыҙ", тип әйтә. Тимәк, ошо ғәмәлдә ураҙаның сәләмәтлек өсөн ыңғай яҡтары булыуына ишара яһала.

Бөгөнгө фән ураҙаны айырым кешеләрҙең үҙ инаныуҙарына ярашлы ашау-эсеүҙән тыйылыуҙан ғибәрәт, теләгәндәр - тотҡан, теләмәгәндәр тотмаған ғибәҙәт кенә түгеллеге хаҡында раҫлай. Кеше физиологияһын өйрәнеп, күп тикшеренеүҙәр үткәргән ғалимдар ураҙаның кеше организмы мөһим функцияларын тейешенсә үтәһен өсөн кәрәк булған тәбиғи һәм мотлаҡ күренеш булыуын иҫбатлаған. Улар фекеренсә, ураҙа кеше сәләмәтлеге өсөн аҙыҡ, һыу, тын алыу, хәрәкәт итеү, йоҡо кеүек үк мөһим. Кеше оҙайлы ваҡыт йоҡламағанда һәм ашамағанда ауырыуға дусар булған кеүек үк, ураҙа тотмаған тәндең дә эшмәкәрлегенә зыян килә. Ислам дине буйынса тотолған ураҙа (көн буйына бер тәғәм дә ризыҡ ҡапмау һәм һыу эсмәү) организмдағы таҙарыныу һәм төҙәлөү процестарын әүҙемләштереү өсөн идеаль ҡағиҙә булып тора. Шулай уҡ ураҙа айырым ваҡыт дауамында, даими булмағанда яҡшы һөҙөмтә бирә. Ислам динендә лә шулай. Мосолмандар йылына бер ай Рамаҙан айында мотлаҡ, ә башҡа айҙарҙа, Бәйғәмбәрҙең сөннәтенә эйәреп, аҙнаһына бер-ике тапҡыр ураҙа тотоу менән сикләнә.

Белеүебеҙсә, ураҙала ниәт мөһим. Ул ябығам да, һауығам да, тип тотолмай, иң башта кеше уның фарыз ғәмәл булыуын танып, Аллаһ алдындағы үҙ вазифаһын үтәй. Урынына еткерелеп тотолған ураҙа тән өсөн дә, йән өсөн дә шифа бирә. Том Бернс исемле Америка ғалимы, үҙе мосолман булмаһа ла, артыҡ килограмдарҙан ҡотолоу өсөн ураҙа тота башлай. Күпмелер ваҡыттан был ғәмәлдең мейе өсөн дә файҙалы икәненә төшөнә. Ураҙа төрлө нәмәне яҡшыраҡ, аныҡыраҡ күрергә ярҙам итә, шул уҡ ваҡытта яңы фекерҙәр, идеялар тыуа, тойғолар урынына килтерелә, ти ул. Үҙендә шулай уҡ рухи күтәрелеш кисереүен шәйләп ҡала. Быға тиклем ул ураҙаны организмды аҙыҡ ҡалдыҡтарынан таҙартыу итеп ҡараһа, хәҙер ураҙаны йөрәгендә ғүмере буйы йыйылған бысраҡлыҡтарҙан таҙарыу өсөн тота башлай. "Бигерәк тә донъяны күп гиҙеп, ундағы ғәҙеллеһеҙлекте күргәндән һуң, мин үҙемде быының өсөн яуаплы һанайым. Ураҙа тотҡанда ашау теләгем бөтөнләй юғала һәм тәнем ҙур еңеллек кисерә. Мин бар насар нәмәләрҙән, көнсөллөктән, көнләшеүҙән, ҡурҡыу һәм йөрәгемде баҫып алған башҡа бик күп хистәрҙән үҙемде азат тоям, шулай уҡ кешеләрҙең үҙемә ҡарата булған яҡшы мөнәсәбәттәрен күрәм. Үҙемдең рухи үҙгәрештәре өсөн ураҙаға бурыслымын", - ти Америка ғалимы.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ БРИКС саммиты Өфөлә 2015 йылдың 9-10 июлендә үтәсәк. Был дата күптән түгел Бразилияның Форталезий ҡалаһында үткән БРИКС лидерҙарының киңәйтелгән ултырышында билдәләнде. Был сараларҙа Рәсәй Президенты Владимир Путин етәкселегендәге рәсми делегация составында Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Форталезий декларацияһында билдәләнеүенсә, "Бразилия, Һиндостан, Ҡытай, Көньяҡ Африка Рәсәйҙең VII БРИКС саммитын 2015 йылда Өфөлә үткәреү тураһындағы тәҡдимен хупланы".

✓ Өфөлә Урмансылар паркын төҙөкләндереү эштәре башланды. Шуға ла 1 сентябргә тиклем паркта йөрөү тыйыла. Быға тиклем Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов өфөләргә ошо паркты бергәләп төҙөкләндереү тәҡдиме менән мөрәжәғәт иткәйне һәм үҙе лә бында ойошторолған ағас ултыртыу өмәһендә ҡатнашҡайны.

✓ Ҡурған өлкәһе Сафаҡүл ауылында башҡорт йырҙарын башҡарыусыларҙың "Сыңрау торна" фестивале булып үтте. Был фестиваль бынан ун йыл элек ойошторола башлаған, 2009 йылда Ҡурған өлкәһе статусын алған. Бөгөн ул өлкәнең башҡорттар күпләп йәшәгән бер нисә районын берләштерә.

✓ Өфө трикотаж фабрикаһында (Tricardo сауҙа маркаһы) тегелгән кейем-һалым Мәскәүҙә Вячеслав Зайцевтың Мода йортонда һатыласаҡ. Был турала модельер Вячеслав Зайцев Башҡортостандың баш ҡалаһында үткән, Өфө трикотаж фабрикаһы менән бергәләп эшләнгән, яңы көҙгө-ҡышҡы коллекция презентацияһында хәбәр итте. Өфөлә яңы коллекцияның тик бер өлөшөн генә күрһәттеләр. Тулыһынса презентация октябрҙә Мәскәүҙә Fashion Week Mercedes-Benz Russia Мода аҙналығында үтәсәк.

✓ Баш ҡалала Украинанан күсеп килеүсе граждандар өсөн Социаль паспорт эшләнде. Паспортты тултырғанда Өфөгә килеүсе ғаиләнең составы, һаулыҡ торошо, ихтыяжы һәм социаль диагностикалау мәғлүмәттәре теркәлә. Был мәғлүмәттәр артабан Украина гражданының йәшәр урынын билдәләү өсөн төрлө ойошмаларға бирелә.

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# МАЛ ҺУЙЫУҘЫ ЛА...

## баш бәләһенә әйләндерәләр



**Мин ауыл кешеһе. Ауылда тыуҙым, шунда үҫтем, йәшәйем. Йәмғәт тормошонда ҡатнашып бармаһам да, үҙемде битараф кешеләр сафына ла индермәйем. Шуға күрә лә айырым мәсьәләләр мине лә борсомай ҡалмай. Ауыл проблемалары тураһында күп яҙалар. Мәктәптәрҙең ҡыҫҡарыуы, эшһеҙлек, эскелек хаҡында ла йыш ишетергә, уҡырға тура килә. Ләкин һүҙ был хаҡта түгел.**

Ауыл кешеһе өсөн йорт участкаһында емеш-еләге, йәшелсә-картуфы үҫһә, ҡураһында малы ишәйеп, уларҙы һата торған урын булһа, үҙен һәм ғаиләһен бер хәстәрһеҙ ҡарай ала. Хатта даими эшләгән урын да кәрәкмәй, былай ҙа типтереп донъя көтә ул. Ләкин... Ҡайһы саҡта һыйыр тиҙәген ат тиҙәгенән дә айыра алмаған кешеләр, беҙҙең тормошобоҙҙо "еңеләйтәләр"ҙә ебәрәләр.

Бына тағы ҡатмарландырҙылар хәлде. 2014 йылдың 1 майынан һатыуға тигән малды, махсус урында ғына һуйып буласаҡ - Таможня союзының талаптары шул (ҡайһы бер төбәктәрҙә, мәҫәлән Башҡортостанда был ваҡыт килеһе йыл башына тиклем кисектерелде). Ҡуранда һуйылған малды тыныс күңел, таҙа намыҫ менән үҙ өйөңдә ашауҙы бер кем дә тыймаясаҡ, әлбиттә. Хатта шым ғына туғандарына, таныштарына һатыу мөмкинлеге лә буласаҡ. Ләкин справкаһы булмаған ит менән тотолһаң... Тынысыраҡ, Сталин заманы түгел дә, ә шулай ҙа итте закон нигеҙендә тартып аласаҡтар.

Ошо ҡарарға, регламентҡа ҡул ҡуйған чиновниктарҙың ниәте, һис шикһеҙ, изге - ауырыу мал итенең һатыуға сығып, кешеләрҙе ағыулау мөмкинлеге киҫеләсәк, ти улар. Махсус урындарҙың тәғәйенләшен дә аңлаталар. "Забойниктарҙа" ветеринарҙар, малың һау, тигән справка бирәсәктәр, тыныс күңел менән ошо территорияла малыңды бысаҡлаясаҡһың (башҡа ерҙә ярамай), һуңынан ошо бирелгән справка нигеҙендә итеңде баҙарға сығарып һата аласаҡһың. Барыһы ла ябай, үтә лә ябай...

Хәҙер инде был хәлгә ауыл кешеһе күҙлегенән ҡарайыҡ. Беренсенән, ун минут эсендә генә (күберәккә уның мөмкинлеге булмаясаҡ) мал табибы һыйырыңа, атыңа, һарығыңа диагноз ҡуйып өлгөрәсәк микән, тигән һорау тыуа. Ул моғайын, йылына ике тапҡыр малдарҙан алынған ҡан анализы һөҙөмтәләре нигеҙендә ҡағыҙ яҙып биреү менән генә сикләнәсәктәр. Ә беҙ әле лә ит һатҡанда ошо уҡ справканы күрһәтәбеҙ түгелме? Ниндәй айырма? Әлбиттә, был ҡағыҙҙы ҡайһы бер саҡта күрше ауылға барып алыр кәрәк ине. Ә хәҙер... Хәҙер ҡайҙалыр йөрөргә лә кәрәкмәй, тип аңлата чиновниктар, справканы малды һуйған урында уҡ бирәсәктәр. Тик бына был урындың ауылыңдан бер нисә тиҫтә саҡрымда икәнен генә әйтмәйҙәр. Икенсенән, (тура һәм күсмә мәғәнәлә лә) был мал һуйыу урындарын "тотоусы" кешеләр, ойошмалар, органдарға ла аҡса түләр кәрәк буласаҡ бит. ВТО шарттарында иттең хаҡы ниндәй генә осраҡта ла айырым бер кимәлдән күтәрелмәйәсәген иҫәпкә алғанда, хатта биш йөҙ һум да ҙур аҡса. Был сумма сағыштырыу өсөн генә алынды, тариф күпме булыры билдәле түгел әлегә, әммә ҡайһы бер өлкәләрҙә эре малды махсус тәғәйенләнгән урында һуйған өсөн 1000 һум түләр кәрәк, тиҙәр.

Өсөнсөнән һәм иң мөһиме, малды махсус урынға транспортлау, йәғни алып барыу мәсьәләһе. Ниндәйҙер стандарттар менән яраҡлашырға теләгәндә, иң тәүҙә ул стандарттарға шарттар булдырыу кәрәклеген уйлай микән беҙҙең "эшем эйәләребеҙ"? Мәҫәлән, Урал аръяғын алайыҡ. Белеүемсә, был райондарҙа махсус мал һуйыу урындары районға берәү генә. Яңыларының төҙәлөүө хаҡында ишетелмәй әлегә. Күҙ алдына килтерәйек: Белорет районының Асы, Зөйәк яҡтарынан берәү мал һатырға булды икән, ти. Быны өсөн уға Белорет ҡалаһының ситендә урынлашҡан берҙән бер мал һуйыу урынына һыйырын алып килергә кәрәк. Ләкин ул бер нисә Европа дәүләтен урап сығырлыҡ араға нисек итеп малын алып барасаҡ? Тәғәйен транспорты юҡ, әммә ғаиләһен ҡарар, балаһын уҡытырға аҡса кәрәк. Сараһыҙлыҡтан, һыйырҙы ошо арала йөрөгән электричкаға тейәп китергә мәжбүр буласаҡ түгелме? Пассажир поездындағы һыйыр, беҙгә генә түгел, ғәжәпләнерлек бер нәмә лә ҡалманы, тип иҫәпләгән Белорет-Инйәр -Өфө электричкаларында йөрөгән студент һәм туристар өсөн дә сәйер күренеш хатта.

Үрҙә әйтелгәндәрҙән сығып, тиҙҙән мал һуйыу оло бер баш бәләһенә әйләнергә тора икәнен күҙалларға була. Ләкин... Таможня союзы талаптары ҡаты булған кеүек уҡ, ҡайһы бер чиновниватрыбыҙҙың мейеһе лә уйланыуҙан туҡтағанлыҡтан, таш кеүек ҡатҡан шул...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙемә ҡалһа, бер ниндәй ыңғай яғын күрмәйем ошо "еңеллектәрҙән". Ауыл кешеһен бөлдөрөүҙөң сираттағы аҙымы ғына, тип һанайым. Нимәгә, кемгә кәрәк булды икән донъяны улай ҡатмарлаштырырға? Иң ғәжәпләндергәне: депутаттарҙың һәм халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртырға тейешле вазифалы кешеләрҙең береһенең дә ҡаршы сыҡҡанын ишетмәнем. Йә улар проблеманы белмәйҙәр, йә уларға барыбер, йә улар ошо рәүешле аҡса һуғыуҙың перспективалары менән иҫерген. Ошондай шарттарҙа ҡайһы бер дәүләт граждандарының, Таможня союзына инергә теләмәйенсә, урамға сығыуҙарын да аңларға була...**

**Ҡасим ДӘҮЛӘТОВ.**

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ҺАБАНТУЙҘАР...

## түрәләр өсөн генәме?

**Һабантуйҙарыбыҙ һәм ошоноң кеүек башҡа байрамдарыбыҙ ҙа күҙ буяуға әйләнеп бара һымаҡ. Халҡыбыҙ элек үҙенең бындай байрамдарына оло мәғәнә һалһа, бөгөн беҙ финанс сығымдары ғына һалабыҙ. Эрерәк түрәләр, ҡиммәтерәк бүләктәр байрамыбыҙҙың баһаһын билдәләй...**

Бөгөн халыҡ, бигерәк тә ойоштороусылар һабантуйҙың ҡайһы өлөшөнә ныҡлап әҙерләнә, тиһегеҙ? Ат бәйгеһенә, көрәшкә, йә булмаһа тамашағамы? Юҡ, бөгөн бар көс абруйлы ҡунаҡтарҙы ҡаршы алыуға йүнәлтелә. Шуға ла ҡунаҡ ҡаршылау байрамдың төп элементына әйләнә. Ҡунаҡсыллыҡ халҡыбыҙҙың матур сифаттарының береһе. Ләкин беҙ бөгөн уны башҡасараҡ аңлайбыҙ, буғай. Атабабаларыбыҙға ҡунаҡ килеү оло байрам, ҡыуаныс булһа, хәҙерге байрам ойоштороусылар өсөн ул ысын мәғәнәһендә баш ауырыуына әйләнә. Абруйлы ҡунаҡтар килһә лә ҡыйын, йәғни бар мәшәҡәт, бар иғтибар уларға ғына йүнәлтелә, килмәһәләр ҙә ҡыйын - әҙерлек бушҡа киткән һымаҡ була. Бына шулай юҡҡа сыға ла инде байрам йәме, байрам сәме, байрам йөкмәткеһе.

Райондарҙан, ауылдарҙан сыҡҡан дәрәжәле кешеләрҙең яҡташтар менән байрам уртаҡлашыуы яҡшы ла һуң. Ләкин улар тыуған яҡтарына, ауылдаштары, милләттәштәре янына рәхмәтле ҡунаҡ булып ҡайтһын, улар менән аралашһын, уларҙың тормош хәлдәре тураһында белешһен ине ул. Бөгөн улай түгел шул: дәрәжәле ҡунаҡтар байрамға килеүселәрҙең бар иғтибарын йәлеп итеп, йылып итеп кенә үтеп китәләр ҙә, тирмәләргә инеп бикләнәләр. Ауылдаштары түгел, туғандары ла күрмәй ҡала хатта...

**Азамат САЛАУАТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 2012 йыл менән сағыштырғанда торлаҡ төҙөлөшө күләме ете процентҡа артҡан. 2013 йылда Башҡортостанда бөтә финанслау сығанаҡтары иҫәбенә 2485,3 (100,6 процент) мең квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. 2013 йыл йомғаҡтары торлаҡты файҙаланыуға тапшырыу күләме буйынса Башҡортостан Республикаһын Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында беренсе урынға сығарған. Айырыуса Стәрлетамаҡ (167 процент) һәм Ғафури (127,1 процент) райондарында әүҙем төҙөгәндәр.

✓Башҡортостан автоинспекцияһы Динар Ғилметдинов журналистар менән осрашыуҙа быйыл ярты йылда республика юлдарында 1717 авария осрағы һәм уларҙа 251 кешенең һәләк булыуы, 2138 кешенең төрлө яралар, имгәнеүҙәр алыуы теркәлеүе тураһында белдерҙе. Хәҙер юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтарының яртыһы тиерлек автоматик видеокамералар ярҙамында асыҡланыуы, юлдарҙы ошондай ҡорамалдар менән йыһазландырыу дауам ителәсәге тураһында ла һөйләп үтте. Шулай уҡ Өфөләге машиналарҙы парковкалау ҡағиҙәләрен боҙоуҙар тураһында ла телгә алды. Уның билдәләүенсә, көн һайын ошондай 800 осраҡ теркәлә.

✓Динар Ғилметдинов билдәләүенсә, юлдарҙа балаларҙың имгәнеүен һаҡлау ҙа автоинспекторҙарҙың төп бурысы булып тора. Йыл башынан балалар ҡатнашлығында 159 юл хәрәкәте һәләкәте теркәлгән (уларҙың 98-е - Өфөлә), уларҙа 7 бала үлгән, 167 бала имгәнгән. Был осраҡтарҙа 63 бала - пассажир, 77 бала йәйәүле сифатында теркәлгән. Динар Ғилметдинов әйтеүенсә, автоинспекция төрлө юл ҡағиҙәләрен боҙоуҙағы яуаплылыҡты юл һәм коммуналь хеҙмәттәр иңенә һалыу буйынса ла әүҙем эш башлаған. Улар быйылғы 556 юл һәләкәтенең төп сәбәпсеһе насар юлдар тип иҫәпләй.

✓2015 йыл Рәсәй Федерацияһында әҙәбиәт билдәһе аҫтында үтәсәк. "Рәсәй Федерацияһында Әҙәбиәт йылын үткәреү тураһында"ғы Указға РФ Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған. Документҡа ярашлы, шуның менән йәмғиәттең иғтибарын әҙәбиәтҡә һәм уҡыуға йәлеп итеү планлаштырыла.

**“Башинформ”дан.**

✓ Миҙал ҡаһарманлыҡ күрһәткән, хеҙмәт бурыстарын үтәгәндә батырлыҡ ҡылған йәки ғилми, ижади, спорт йәиһә башҡа ижтимағи өлкәлә айырым ҡаҙаныштарға эйә балалар тәрбиәләүсе ата-әсәләргә бирeләсәк.



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТЕЛЕҢДЕ ТЫЙЫП ТОР...

**Хәҙер әҙәбиәт һәм сәнғәт, халыҡ ижады әҫәрҙәрен халыҡ алдында һөйләгәндә, сәхнәләштергәндә, концерттарҙа һәм башҡа күңел асыу тамашаларында, киң матбуғат саралары һәм кинотеатрҙарҙа күрһәтелгән фильмдарҙа әҙәпһеҙ һүҙҙәр ҡулланыу тыйыла.**

Ошо хаҡта яңы ҡанун үҙ көсөнә инде. Әгәр фильмдарҙа цензуранан үтмәҫтәй лексика бар икән, улар прокат таныҡлығы алыуҙан мәхрүм ителәсәк һәм ил экрандарына сығарылмаясаҡ. Уларға "Әҙәпһеҙ һүҙҙәр бар" тигән иҫкәрмә йәбештереләсәк. Был сикләүгә закон үҙ көсөнә ингәнгә тиклем прокатҡа сығарылған фильмдар инмәй.

- Ҡанун бик ҡәтғи булһа ла, телмәр, аралашыу мәҙәниәтен ғәмәлдә һаҡлай. Һуңғы йылдарҙа әҙәпһеҙ һүҙҙәр ҡулланып аралашыу ғәҙәти күренешкә әүерелде. Боҙолған телде йәштәр үҙҙәренең кумирҙарынан, геройҙарынан, хатта сәйәси лидерҙарҙан үҙләштерә, - ти закондың авторҙашы, РФ Дәүләт Думаһының Мәҙәниәт буйынса комитет рәйесе урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина. Парламентарий фекеренсә, был аҙым хәҙерге йәмғиәттең үҙ телен, мәҙәниәтен ҡырағайлыҡтан яҡлап, һаҡлап ҡалыу ихтыяжы нигеҙендә тыуған.

1 июлдән законды үтәмәүселәргә етди штрафтар ҡаралған: граждандарға - 2 мең һумдан 2,5 мең һумға, ойошма-предприятиеларға - 40 мең һумдан 50 мең һумға. Тыйылған киноны күрһәткән өсөн штраф күләме 50 мең һумдан 100 мең һумға. Ошо ҡағиҙәне ҡабатлап боҙған осраҡта штраф күләме арта, вазифа биләүселәрҙең дисквалификацияланыуы, ә инде ойошма-предприятиеларҙың эшмәкәрлеге туҡтатылыуы мөмкин. Әҙәби тел нормаларына тура килмәгән һүҙҙәрҙе бойондороҡһоҙ экспертиза билдәләйәсәк.

# ХАҠТАР АРТТЫ

**1 июлдән Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендә лә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡ артты. Тарифтарҙы күтәрмәйенсә хеҙмәт күрһәтеү сифатын яҡшыртыу мөмкин түгел, тип иҫәпләй илдең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы.**

Йылылыҡ торбаларын ремонтлауҙа артта ҡалыу, коммуналь объекттарҙы модернизациялауға аҡса етмәүе, һ.б. - былар барыһы ла ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмаларҙың ваҡытында ремонт үткәреүгә тейешле средстволары булмауы һөҙөмтәһе. Коммуналь хеҙмәттәргә хаҡ артыу Башҡортостанда Ағиҙел, Благовещен, Ишембай, Нефтекама, Салауат, Сибай, Стәрлетамаҡ һәм Өфө ҡалалары халҡына ҡағыласаҡ. Мәҫәлән, һыу менән тәьмин итеү хеҙмәтенә хаҡ - 40, ә коммуналь хеҙмәттәр өсөн дөйөм иҫәпләнгән түләү 18 процентҡа артыуы ихтимал.

Йылдың икенсе яртыһында тарифтарҙың үҫеүен иҫәпкә алып, республика етәкселеге адреслы социаль түләүҙәр (АСВ) рәүешендә халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеүҙе дауам итергә ҡарар ҡылды. Социаль түләүҙәргә законда ҡаралған сиктәрҙе үтеүсе граждандар өмөт итә ала. Бынан тыш, аҙ тәьмин ителгән граждандар субсидия алырға ла хоҡуҡлы. Ул фатир өсөн түләү ғаиләкилеменең 20 процентынан арткан граждандарға бирелә.

…ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

# МАТУРЛЫҠ ҠЫЙРАЛА...



**Ҡала хакимиәте йәмәғәтселектең һәм журналистарҙың иғтибарын вандализм проблемаларына йүнәлтеп тора.**

Үкенескә күрә, төҙөкләндереү эштәре башҡарылып, матурлыҡҡа күҙ өйрәнеп тә өлгөрмәй, улар шунда уҡ ҡыйратыла башлай. Ул ғына ла түгел, халыҡтың үҙенең аҡсаһына уҡ ремонтланған подъездар стеналары, лифттар, йорт фасадтары сәнғәткә яҡын да килмәгән һүрәттәр, матур телмәрҙән алыҫ торған "әҙәби" жанр менән тула. Хатта мәҙәни, тарихи һәйкәлдәрҙе, зыяраттарҙағы ҡәбер таштарын бысратыу осраҡтары ла юҡ түгел.

Уҙған аҙнала Дим районында вандализмдың сираттағы осрағы теркәлә. Билдәһеҙ кешеләр Хәҡиҡәт урамындағы фонтанды биҙәп торған көршәкле ҡыҙ скульптураһын ватып китә. Бындай осраҡтарҙың йышайыуы борсоуға һала. Быға тиклем Мусоргский урамындағы скверҙа велосипедсының фигураһы боҙола. Яҙғыһын вандалдарҙың Мәҙәниәт һәм ял паркында балаларҙың яратҡан Дейеүенең бер башын өҙөп ташлауы асыҡлана. Ҡала округы хакимиәте халыҡтың тормошон матурыраҡ һәм уңайлыраҡ итергә тырышҡан һайын, бәғзеләр был эшмәкәрлекте юҡҡа сығарырға, булғанды ҡыйратырға маташа. Һөҙөмтәлә таҙа һәм матур ҡалала йәшәргә теләгән намыҫлы кешеләр зыян күрә.

Үҙ яғынан муниципалитет бәләкәй балаларҙан башлап профилактика эштәре алып бара. Әммә был ғына етерлек түгел. Һәр граждан һиҙгерлек күрһәтергә, граждандыҡ яуаплылығы тойорға, бындай осраҡтарҙың шаһиты булғанда хоҡуҡ һаҡлау органдарына хәбәр итергә, хоҡуҡ һаҡлау органдары иһә бындай күңел әрнеткес күренештәр буйынса тикшереү үткәреп, ғәйеплеләр яҙаһын алырға тейеш.



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҠШЫ БАЛА ДАН КИЛТЕРӘ

**Балалары Башҡортостанға дан килтергән ата-әсәләрҙе "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән бүләкләйәсәктәр. Төбәк наградалары исемлегенә "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалын индереү тураһында закон БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында ҡабул ителде.**

"Башҡортостан Республикаһының дәүләт наградалары һәм почетлы исемдәре тураһында"ғы законға индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, миҙал Башҡортостан Республикаһына дан килтергән, ҡаһарманлыҡ күрһәткән, кеше ғүмерен ҡотҡарыу, законды, хоҡуҡ тәртибен һәм именлекте яҡлау буйынса хеҙмәт бурыстарын үтәгәндә батырлыҡ ҡылған йәки ғилми, ижади, спорт йәиһә башҡа ижтимағи өлкәлә айырым ҡаҙаныштарға эйә балалар тәрбиәләүсе ата-әсәләргә бирeләсәк. Дәүләт наградаһы шулай уҡ өс йәки унан күберәк инвалид бала йәиһә алты һәм унан күберәк етем бала һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалыусы балаларҙы улыҡҡа алыусыларға тапшырыласаҡ.

"Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән бүләкләүгә йәшәү урыны буйынса муниципалитеттар, улар эшләгән ойошмаларҙың хеҙмәт коллективтары йәки улар ҡатнашҡан ижтимағи берләшмәләр юллаясаҡ. Үтенес ҡағыҙы БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт наградалары буйынса комиссия тикшереүенә йүнәлтеләсәк. Бүләкләү тураһында ҡарарҙы республика башлығы ҡабул итәсәк.

# ӨФӨ ЙҮКӘЛӘРЕ...

**Октябрь проспектында төрлө ваҡытта ултыртылған ағастарҙың өстән ике өлөшө (70 проценттан ашыуы) - йүкәләр. Был хаҡта Башҡорт дәүләт аграр университеты аспиранттарының 2014 йылдың яҙы һәм йәйе үткәргән тикшеренеү мәғлүмәттәре дәлилләй. Тимәк, композитор Рим Хәсәновтың билдәле "Өфө йүкәләре" йыры тиккә генә Өфөнөң рәсми булмаған символы түгелдер.**

Һуңғы арала Октябрь проспектында 265 ағас ултыртылған, уларҙың берәүһе миләш ағасы, бишәүһе алма ағасы, берәүһе дардар япраҡлы саған, ун ҡайын, 11 дардар, 19 тирәк, 12 шыршы һәм 206 йүкә.

- Ҡала юлдары буйына ултыртылған ағастар, тәү сиратта, газға сыҙамлы булырға тейеш, - тип аңлатты Башҡорт дәүләт аграр университетының агротехнология һәм урман хужалығы факультеты аспиранты Гөлназ Шәйбәкова. - Бынан тыш, ағастар һыуыҡты эҙемтәһеҙ үткәрергә тейеш - Башҡортостанда ҡыштар йыш ҡына нығ һыуыҡ була.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 1 июлдә "Рәсәй аллеяһы" Бөтөн Рәсәй акцияһы сиктәрендә Башҡортостандың үҫемлек-символы өсөн тауыш биреү башланды. Республиканың мөмкин булған символдары исемлегенә йөрәк рәүешендәге йүкә, пирамида кеүек тирәк, "Салауат Юлаев" сирене, ябай мәтрүшкә һәм Урал ҡурайы инде.

**"Башинформ".**

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы кәрәҙле телефондан табипҡа яҙылыу өсөн берҙәм номерҙы үҙгәртте. Хәҙер табипҡа яҙылыу өсөн 09-383 берҙәм һанын йыйырға кәрәк. Был номер МТС, Мегафон, Билайн операторҙары өсөн эшләйәсәк.

✓Өфөнөң 13-сө мәктәп-интернаты уҡыусылары Илдус Шәйхисламов һәм Артур Сәйетгәрәев Голландияның Альфен ҡалаһында уҙған коляскала теннис буйынса командалар араһында Донъя кубогында Рәсәйҙең үҫмерҙәр йыйылмаһы составында сығыш яһаны. Ярыштар һөҙөмтәһе буйынса Рәсәйҙең йыйылма командаһы беренсе урын яуланы.

✓Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Азат Йыһаншин Салауат дәүләт башҡорт драма театры директоры итеп тәғәйенләнде. Азат Йыһаншин Баймаҡ ҡалаһында тыуған, Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлағандан һуң Милли йәштәр театрында, Башҡорт дәүләт академия драма театрында - актер, Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театрында режиссер, театрҙың художество етәксеһе булып эшләй.

✓"Мөғжизәле шашкалар" Бөтә Рәсәй клубы призына рус шашкалары буйынса Рәсәй команда беренселегендә баш ҡаланың 23-сө балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе тәрбиәләнеүселә ренән тупланған Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының йыйылма командаһы турнир уҙғарылыуҙың 18 йыллыҡ тарихында икенсе йыл рәттән еңеү яуланы.

✓19 июлдән 31-нә тиклем Воровский һәм Минһажев урамдары киҫелешендәге трамвай юлдарына капиталь ремонт үткәрелә. Шул сәбәпле "Революцион урам" туҡталышынан "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы" туҡталышына тиклем трамвай хәрәкәте туҡтаясаҡ. Был осорға 21-се маршруттағы троллейбустар һаны арттырыласаҡ.

✓Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты 2014 йылда мосолмандар өсөн изге урындар иҫәпләнгән Мәккә һәм Мәҙинәгә хаж ҡылырға саҡыра. Теләүселәр Өфө ҡалаһы, Чернышевский урамы, 103 адресы буйынса Башҡортостан мосолмандарының Диниә назаратына мөрәжәғәт итә ала. Белешмә өсөн телефондар: 272-70-71, 8-917-04-10-750

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**"Башҡорт балы" тигән яҙыу уҡыһа, йәки бал батманы ҡосаҡлаған айыу һынын күрһә, моғайын, бөтәһе лә Бөрйән районын күҙ алдына баҫтыралыр. Был йәһәттән "Башҡорт балы - Бөрйән даны" тип исемләнгән Халыҡ-ара этнофестиваль Башҡортостандың тап ошо төбәгендә үткәрелеүенә аптырарлыҡ та түгел. Шифалы үҙенсәлектәре менән бөтөн донъяға билдәле башҡорт балына арналған сара милләт-ара һәм өлкә-ара бәйләнештәрҙе нығытыу, башҡорт милли музыкаһына, рухи ҡиммәттәренә, тәбиғәт ҡомартҡыларына иғтибарҙы арттырыу һәм һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итеү, башҡорт балын һәм унан эшләнгән аш-һыуҙы пропагандалау, республикабыҙҙа туризмды үҫтереү маҡсатында үткәрелде.**



# БАШҠОРТ БАЛЫ ИЛДЕ ДАНЛАЙ,

## йәғни Бөрйәндә үткәрелгән матур сара тураһында бер кәлимә

### Күс - ул көс...

Солоҡ, түмәр умарталар Башҡортостандың тик бер төбәгендә - Бөрйәндә генә яҡшы һаҡланһа ла, ҡортсолоҡ менән мөкиббән китеп шөғөлләнеүсе умартасылар ҡул ҡаушырып ятмай икән. Уларҙың береһе - Федоровка районы Оло Сытырман ауылы оҫтаһы Мортаҙа Солтанғолов, кәрәҙле бал етештереү өсөн түмәр умартаны ыҡсым ғына итеп эшләп, бал ҡорттарынан шунда кәрәҙ ҡойҙороп, ҡышҡы осорға уларҙы рамлы умартаға күсереп алыу ысулын уйлап тапҡан. Умартасы инә бал ҡортон был түмәр умартанан нисек күсереп алыу серен береһенә лә сисмәне, шулай ҙа ҡыш буйына кәрәҙле балды ошо һауытта һаҡлап ашарға мөмкин булыуын барыһына ла ихлас һөйләне.

Умартасылар серҙе ныҡ йәшереүсе кешеләр икән, тиһәк, бал ҡушып әҙерләгән милли ризыҡтар күргәҙмәһендә ҡатнашыусы хужабикәләр унан да бигерәк сер эйәләре булып сыҡты. Телде йоторлоҡ тәмле сәк-сәк, баллы ҡоймаҡ, эремсек бәлеше, ҡабартма, "рауза сәскәләре", төрлө емеш-еләк һуттарын тәмләп ҡарарға өгөтләп тороусы оҫтабикәләр рецептарын "һатманы". Уларҙың тырышлығы "Балдан яһалған иң татлы тәмлекәс" номинацияһында билдәләнде, һөҙөмтәлә беренсе урынды Бөрйән районынан Роза Мәликова яуланы. "Иң тәмле бал" номинацияһында ла ошо уҡ райондан Рәфҡәт Ғәҙелшиндың крәҫтиән фермерлыҡ хужалығында етештерелгән татлы ризыҡ юғары баһаланды.

"Башҡорт балы - Бөрйән даны" Халыҡ-ара этник фестивалендә күргәҙмә-йәрминкәләр, төрлө конкурстар, спорт ярыштары, халыҡ уйындарында ихлас ҡатнашыусылар театрлаштырылған тамашанан да ситтә ҡалманы. Атаһының улына ырыу солоҡтарын һәм ырыу тамғаһын тапшырыу йолаһы бөтөн этник фестивалдең асылына төшөндөрҙө лә ҡуйҙы. Башҡорт халҡының Бөрйән ере менән бәйле рухи һәм матди байлығы бына ошолай һаҡсыл рәүештә быуындан-быуынға ҡәҙерләп күсә барырға, уның бер бөртөгө лә иғтибарҙан ситтә ҡалмаҫҡа һәм хәтеребеҙҙән юйылмаҫҡа тейеш. Сценарий авторы Зөһрә Бураҡаева һәм режиссер Сулпан Аҫҡаровның иждад емеше тағы бер ҡат тарихи үткәндәребеҙгә, ата-олатайҙарҙан ҡалған йолаларға иҫкелек ҡалдығы тип ҡарауҙан арынырға, уларҙы хәтеребеҙҙә булһа ла янынан тергеҙергә ярҙам итте. Тиҫтәнән ашыу башҡорт этник төркөмдәре, Алтайҙан Сарымай Урчимаев, Тыванан Радик Тулюш ҡатнашлығында ойошторолған концерт һәр кемдең күңеленә дәрт, осҡон өҫтәне.

Башҡортостанға "Башҡорт Уралы - Урал батыр ере" ҡатнаш мәҙәни-тәбиғи объекты менән танышыу өсөн килеүсе ЮНЕСКО-ның халыҡ-ара эксперттар делегацияһы һәм ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәй Комиссияһы ағзалары ла "Башҡорт балы - Бөрйән даны" этнофестивален тамаша ҡылды. Белгестәр фекеренсә, башҡорт халҡының рухи мираҫын һәм тәбиғәт ҡомартҡыларын ЮНЕСКО Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индереп, туристарҙы йәлеп иткәндә лә тәбиғәткә зыян килтерелмәһен өсөн бөтөн саралар күрелергә тейеш. Был йәһәттән, тәү сиратта Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙе яҡшы хәлдә тотоу, уларҙы консервациялау, таҙартыу өсөн үҙебеҙҙә реставраторҙар әҙерләү мөһимлеге билдәләнде.

Күсле ил - көслө ил, тиҙәр. Башҡорт милләте ошоға тиклем үҙ гөрөфғәҙәттәрен, рухи мираҫын, телен һаҡлап ҡала алған икән, был тик ата-бабаларыбыҙҙың бер төптән, бал ҡорттары кеүек дөйөм идея өсөн йәнен-тәнен аямай ең һыҙғанып эшләп, көрәшеп йәшәүенә барып тоташалыр. "Башҡорт балы - Бөрйән даны" Халыҡ-ара этнофестивале туристарҙы йәлеп итер сара сиктәренән сығып, бөгөнгө еңел булмаған заманда башҡорт халҡына бер төптән, бер күс булып ойошоп йәшәргә кәрәклеген күрһәтеүсе йәмле байрам дәрәжәһенә күтәрелә алды.

**(Дауамы 6-сы биттә).**



ҺОРАУ - ЯУАП

## ЭҪЕ ҺЫУҺЫҘ ИНТЕГӘБЕҘ

**Мин 1970-се йылда төҙөлгән йортта йәшәйем. Ошо ваҡыттан алып бер тапҡыр ҙа йортҡа капиталь ремонт эшләнмәне. Крандан аҡҡан эҫе һыуҙың максималь күрһәткесе бер ҡасан да 50 градустан артмай (быны күп тапҡыр иртән һәм кисен үҙем үлсәп ҡарағандан алып әйтәм). Минеңсә, һыуҙың градусы юғарыраҡ булырға тейеш. Ошо хаҡта белергә теләп, күп урынға мөрәжәғәт иттем, ләкин уларҙың барыһы ла "һыу буйынса нормалар юҡ", тип яуап ҡайтарҙы. Был дөрөҫмө? Әгәр ҙә мин хаҡлы булып, крандан аҡҡан һыу эҫерәк булырға тейеш булһа, түләүҙәрҙе янынан иҫәпләтергә мөмкинме?**

- Крандан аҡҡан эҫе һыу 60 градустан кәм, 75 градустан юғары булмаҫҡа тейеш. Был хаҡта СанПиН-дың РФ-һы баш дәүләт санитар врачының 2009 йылдың 7 апрелендә раҫлаған 20-се һанлы "Эҫе һыу менән тәьмин итеү системаһы хәүефһеҙлегенең гигиена талаптары"нда әйтелгән (П.2.4 СанПиН 2.1.4.2496-.9 "Гигиенические требования к обеспечению безопасности систем горячего водоснабжения").

Эҫе һыуҙың раҫланған температураһы үҙгәреүе төндә (00.00-дан 05.00-ға тиклем) 5 градустан, көндөҙ (05.00-дан 00.00-ға тиклем) 3 градустан артмаҫҡа тейеш. Шуға күрә һыу өсөн түләүҙе янынан иҫәпләтергә тулы хоҡуғығыҙ бар. Норманан 3 градусҡа ситләшкәндең һәр сәғәте өсөн түләү 0.1 процентҡа кәмей. Әгәр ҙә эҫе һыу температураһы 40 градустан кәмерәк булһа, түләү һыуыҡ һыу өсөн алынған тариф тар буйынса башҡарыла.

Крандағы һыуҙың тейешле температурала булмауын асыҡлағас та, авария-диспетчер хеҙмәтенә шылтыратығыҙ һәм мөрәжәғәтегеҙҙең номерын яҙып алығыҙ. Әгәр ҙә диспетчерға һыу температураһының ни сәбәпле түбән булыуы билдәле булмаһа, һеҙгә идара итеү компанияһы белгестәре килеп, тикшереү үткәрергә тейеш. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса акт төҙөлә, уның бер данаһы мотлаҡ йорт хужаһы ҡулына тапшырыла. Мөрәжәғәтегеҙ инҡар ителгән осраҡта, һыу температураһын үҙегеҙ тикшереп, акт төҙөтөргә һәм уны йорттағы тағы ике ҡулланыусынан һәм күп фатирлы йорттоң совет рәйесенән (йәки ТСЖ рәйесе) ҡул ҡуйҙыртығыҙ. Был акт, идара итеү компанияһы артабан да тейешле саралар күрмәгән осраҡта, торлаҡ инспекцияһына мөрәжәғәт иткәндә кәрәк буласаҡ.

## МИЛЕККӘ ҺАЛЫМ

**Минең шәхси милкемдә фатир бар, ләкин мин унда түгел, ә гражданлыҡ иремдең өйөндә йәшәйем. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, минән килемгә булған һалымды түләүемде талап итәләр. Был законлымы?**

- Фатирығыҙҙа йәшәмәүегеҙ һеҙҙе милеккә булған һалымдан азат итмәй. Был һалымдан фатирығыҙҙы һатҡандан (йәки бүләк иткәндә һәм башҡалар) һуң ғына ҡотола алаһығыҙ.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Экзема

❖Тирәк ҡайырыһына 1 литр һыу ҡойоп, ҡайнау хәленә еткерергә, бер аҙ һыуытырға һәм 10-15 минутҡа ҡулдарҙы шунда тығып ултырырға. Ҡулдарҙы ҡоротмаҫҡа, үҙҙәре кипкәс, стрептоцид таблеткаһы менән бутаған айыу майы (1 ҡалаҡ) һөртөргә. Дауаны көнөнә 2-3 тапҡыр эшләргә.

❖Баш тиреһе экземаһы һәм сәс ҡойолоуҙан иң яҡшы сара: аҙнаһына 1 тапҡыр эре тоҙ менән баш тиреһен 15 минут тиреһе ышҡырға. Сәстәрҙе сайҡарға. Ауырыу бөтһөн өсөн 6 процедура етә.

❖200 грамм гөлйемеш, 100 грамм кипкән кесерткән менән йәшел ҡарағат, 2 әстерхан сәтләүеге, 0,5 литр һыу. 10 минут бешерергә, 1 тәүлек төнәтергә. 2 ҡалаҡ төнәтмәгә 50 грамм эремсек, 50 грамм бал һалырға, 20 минутҡа һөртөргә.

❖Ҡыш көнө экземанан дауаланыу өсөн : 1 ҡалаҡ кипкән сөйәл үләненә (чистотел) 1,5 стакан һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 10-15 минут алда яртышар стакан эсергә. 7 көн ошо рәүешле дауаланғандан һуң, 2 көн ял итеп алырға. Бер юлы ҡулдарға "Флуцинар" тип аталған мазь һөртөргә була.

❖Йәй сөйәл үләне һуты ярҙамға килер. Үләнде тамыры менән йолҡоп алып, йыуып, ит турағыс аша үткәреп, һутын һығып алырға. Был һутты быяла һауытҡа һалып, ҡараңғы урында тоторға. 5-7 көндән һут әсей башлаясаҡ, шул ваҡытта һауыттың ҡапҡасын асып, уның газын сығарып торорға кәрәк. Һут ҡайнап бөткәс, ҡулланырға әҙер тиган һүҙ. Уны һалҡын ҡараңғы урында һаҡлайҙар. Иртән ярты стакан һыуға тамыҙып, ас ҡарынға эсергә. Дауаланыу тәртибе шулай: көн һайын бер тамсынан башлап, 1-ешәр тамсы өҫтәй барырға һәм 30 тамсыға еткерергә. Киләһе айҙа, киреһенсә, 1-ешәр тамсыға кәмета барырға. Бер юлы экзема урындарына көнөнә 4 тапҡыр ошо уҡ һутты һөртөргә. Беренсе тапҡыр һөрткәндән һуң экзема тағы ла нығыраҡ ҡыста башлаясаҡ. Әммә 2-3 тапҡырҙан дауаның шифаһын үҙегеҙ тойорһоғоҙ. Сөйәл үләне һуты менән 6-7 ай дауаланалар. Бының өсөн 8 литр самаһы һут китәсәк.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТУЙ ЙОЛАҺЫ

**Ҡалымды тулыһынса түләп бөткәс, егет яғында ҡалын туй үткән. Ҡыҙ яғындағы туйҙан һуң ҡайһы ваҡыт йыллап ваҡыт үткән, юридик рәүештә йәш ғаилә теркәлһә лә, ҡалым түләнгәнсе кәләш ата-әсәһендә йәшәгән.**

Ҡыҙ атай йортонан киткән саҡта сеңләү йолаһы башҡарылған. И. Георги тарафынан яҙып алынған материалдарҙа түбәндәге ҡыҙыҡлы ваҡиға һүрәтләнә: "Ҡыҙ ата-әсәһе тирмәһендә ҡымыҙ һабаһына рәхмәтен белдереп, уға ҙур булмаған бүләк бәйләй". Этнографтар фекеренсә, ҡымыҙ һаҡлай торған һаба зат-ырыуҙың берлеген символлаштыра, киңерәк мәғәнәлә алғанда, ул тығыҙ бәйләнеш, ырыуына, иленә тоғролоҡто белдерә. Йола күмәкләп ҡымыҙ эсеү менән тамамлана. Әсәй, ҡайһы бер осраҡтарҙа еңгә ҡыҙға "әсә (инә) һөтө" - аҡ төҫтәге эсемлек эсерә. Ошо һөт йәки ҡымыҙҙы ҡыҙҙың маңлайына, түшенә, йөҙөнә һөрткәндәр. Ул тешләгән таба икмәген әсәй кеше ҡыҙы тәүге тапҡыр ҡунаҡҡа килгәнсе һаҡлаған. Йорт ихатаһынан сығып киткәндә кейәү һәм уның туғандары кәнфит, аҡса ташлаған, ҡыҙ артына әйләнеп ҡарарға тейеш булмаған, юғиһә, уның йәне бүленеп ҡала, тигәндәр. Оҙатыу ваҡытында ҡот сабыу йолаһы башҡарылған. Кейәүҙең туғандары ҡаймаҡ йәки бал һалынған һауытты "урлап" алып сыға, ҡыҙ яғынан ҡоҙалар уларҙы ҡыуа китә. Ҡыуып етмәһәләр, һауытты арбаға һуғып ярғандар, был уларҙың йортона бәрәкәт килеүҙе аңлатҡан. Әгәр ҡыуып тотһалар, бәхет ҡыҙҙың йортонда ҡала, тигәндәр. Ҡайһы яҡ еңеүенә ҡарап, ғаиләлә кем баш буласағын да юрағандар.

Иренең йортона килгәс, кәләш арбанан ҡәйнәһе бүләк иткән малға таянып төшкән. Киленгә кәнфит, бауырһаҡ, сәтләүектәр һипкәндәр, аяғының аҫтына аҡ мендәр йәки аҡ кейеҙ түшәгәндәр, бал-май ҡаптырғандар. "Изгелекле бул, тәмле, баллы телле бул, йомшаҡ һүҙле бул", "Йөҙөң нурлы булһын, һүҙең татлы булһын, бер ҡулың - майҙа, бер ҡулың балда булһын, балаларың күп булһын", - тип теләк әйткәндәр. "Ризығың илдә булһын", "Аш хурлама - ҡоҫторор, ир хурлама - боҫторор", - тигән әйтемдәр ҙә әйтелгән.

Йортҡа ингән саҡта килен тупһала туҡтап ҡалған, ә уны оҙатып килеүселәр: "Килен ишеккә һыймай!", - тип ҡысҡырған. Ҡәйнәһе: "Кер, килен, һиңә бер һарыҡ", - тип яуаплаған. Игенселек үҫеше менән яңынан-яңы йолалар ҙа ингән. Мәҫәлән, кейәү йортона килгәндә килен биҙрәне тултырып бойҙай алып килгән. Уны йорт ҡоштарына һипкәс: "Мин һеҙҙе шатландырған кеүек, Алла мине шатландырһын!" - тип теләгән. Көнбайыш райондарҙа бирнә тейәгән саҡта бер биҙрәгә - ярма, ҡомғанға бойҙай тултырылған. Кейәүгә киткән ҡыҙ ризыҡлы булһын, ризығы шунда булһын өсөн эшләгәндәр быны.

Ҡайһы бер төбәктәрҙә килен ире йортона тәүләп ингәс, мейескә өс тапҡыр тейеп алған. Был уның яңы ырыу-затҡа инеүен һәм усаҡҡа ҡушылыуын белдергән. Бил сисеү йолаһы ла ошо маҡсат менән үткәрелгән. Ҡәйнәһенә бүләк ителгән өҫтәл ябыуы йәки башҡа берәй бүләк киленгә ҡәйнәһе менән бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ аралашырға мөмкинлек биргән. Ҡайныһы менән йәш килен бер йыл йәки унан да күберәк ваҡыт һөйләшмәгән.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ БАЛЫ ИЛДЕ ДАНЛАЙ,

## йәғни Бөрйәндә үткәрелгән матур сара тураһында бер кәлимә

**(Башы 5-се биттә).**

### Тормошобоҙ түңәрәк...

"Башҡорт балы - Бөрйән даны" Халыҡ-ара этнофестивале сиктәрендә үткән тирмәләр ярышында Әбйәлил, Бөрйән, Баймаҡ һәм Белорет райондары ҡатнашты. Башҡорт тирмәһенә барып инһәң, ғәҙәттә, мейелә "донъя түңәрәк" тигән бер генә уй ғына өйөрөлә. Ысынлап та, оҫта ҡуллы хужабикәләр тырышлығы менән быуаттар төпкөлөнән килеп еткән ҡаралтыларға ҡарап тора биргәс, сағараҡ аша төшкән һирәк кенә ҡояш нурҙарына күмелгән тирмәлә үҙеңдең дә тормошоң түңәрәк булып тойола башлай. Төрлө тамғалар һынландырып баҫылған кейеҙ-балаҫтар, әллә ҡайҙан уҡ иғтибарҙы йәлеп итеп ятҡан күҙҙең яуын алырлыҡ түшәк-күпмәләр, сигелгән таҫтамалдар, һуғылған keләмдәр күңелгә әйтеп аңлатып бөткөһөҙ тыныслыҡ бөркә, хатта ваҡ-төйәк проблемалар онотола.

Майҙанға килеүселәрҙе Белорет районы конкурсанттары бер түгел, ике тирмә ҡороп ҡаршы алды. Берәһендә район оҫтабикәләренең ҡусҡарҙар сигелгән таҫтамалдары, янсыҡтары, ҡорама юрғандары эленгән булһа, икенсе тирмә алтын ҡуллы Гөлсирә Салауатованың шәхси биләмәһе булып сыҡты. Баҡтиһәң, бындағы бөтөн ҡул эштәрен ул үҙе эшләгән! "Оҫталыҡ ҡандан килә, өләсәйем эргәһендә уралып йөрөп, өйрәндем инде. Сигелгән яҫтыҡ тыштары, бәйләнгән ултырғыс япмалары, ҡорама юрғандар, мәрйендән яһалған төрлө теҙмәләр эшләйем. Бына яңыраҡ ҡына балаҫ һуғырға махсус станок һатып алдым әле, юғиһә, был балаҫтарым энә менән бәйләнгәйне", - тип ихлас әңгәмә ҡорҙо Гөлсирә ханым. Ҡусҡарҙар төшөрөп сигелгән түшәк, күпертеп өйөп ҡуйылған яҫтыҡтар, башҡорт орнаменттары һалып бәйләнгән сағыу балаҫтар, селтәрҙәр араһына күмелеп ултырған хужабикә әңгәмәләшкәндә лә тик ултырманы, ҡулындағы бәйләмен бәйләүҙе дауам итте.

Асы, Зөйәк ауылынан септә, йүкә арҡандары, кәрзин, ат сабатаһы, аттың бот тиреһе менән көпләнгән йыла ағасынан яһалған һунар саңғылары, быйма эшләүсе оҫталар йыйылған Белорет биләмәһенән сығып киткәс, уңған Баймаҡ районы халҡы тирмәһенә килеп инәһең. Баймаҡтар ҡул эштәре, көнкүреш кәрәк-яраҡтарынан тыш, сыуалда бешерелгән көлсә менән һыйланырға, ҡыр мунсаһында сабынып, барлыҡ сихәттәрҙән арынып сығырға тәҡдим итеп тора. Ишмырҙа ауылынан Әклимә Әфләтунова хәҙер оҙаҡ йылдар бейә ҡымыҙы менән һатыу итә, был фестивалгә 12 төр ҡымыҙ эшләп алып килгән. "Ҡымыҙҙы ике төргә бүлеп эшләйем: балалар һәм өлкәндәр өсөн. Балаларға тәғәйенләнгән ҡымыҙ сөсө була, улар эсһен өсөн төрлө емеш-еләк һалып бешәм. Ә өлкәндәр өсөн калориялы ҡымыҙ етештерәм: ҡаҙылы һәм ялылы. Бындай ҡымыҙ майлы була, сырхаулап торғандарға, ҡыр эштәрендә йөрөгән ир-аттарға был эсемлек бигерәк тә туҡлыҡлы һәм файҙалы", - ти Әклимә Булат ҡыҙы. Баймаҡтарҙың тирмәһендә сағыу-сағыу төҫтәрҙәге буй-буй һыҙатлы балаҫтарға күҙ төшкәйне, баҡтиһәң, Ҡолсора ауылы ағинәйе Рауза Ғафарованың хеҙмәт емештәре булып сыҡты. Етмеш ете йәшен туйлауға ҡарамаҫтан, оҫтабикә әле лә күңеле ятҡан шөғөлөн ташламаған, быйылғы йылда ғына унынсы балаҫын һуҡҡан ул. "Сиктек тә, бәйләнек тә, кәзә тарап, дебетен иләп, шәл бәйләп, Магнитогорск һәм Сибай баҙарҙарына алып барып һатып, балаларҙы шулай үҫтерҙек, Аллаға шөкөр", - ти Рауза инәй.

Төп хужалар бөрйәндәрҙең тирмәһенә яҡынлашыу менән ысынлап та башҡорт балы - Бөрйән даны булыуына инанаһың. Бал батмандарының, урман хужаһы Айыухандың ниндәйе генә юҡ бында! Емеш-еләк өсөн тырыздар, һандыҡ, көбө, хатта ҡайын туҙынан кепкалар, тапочкалар һатыуға ҡуйылған. Яңы Мөсәт ауылы оҫтаһы Дамир Ураҙаев әйтеүенсә, ағастан юнып эшләнгән төрлө зауыҡлы сувенирҙарҙы ул төп эштәренән бушағас, ял иткән саҡтарҙа ғына эшләй, туристик туҡталҡаларға алып барып һата икән. Тирмә эргәһенә үтеү менән станок артында ниҙер һуғып ултырыусы оло йәштәрҙәге инәйҙе күреп, эргәһенә үттем. "Әрмәк һуғып ултырам әле, балам. Бына ошо төрлө сепрәктәрҙе нәҙек кенә итеп йыртып алаһың да, буйына үткәрелгәнептәргә арҡырыһына һалып, тараҡ менән тартаһың. Тарағын борон кешеләр балан ағасынан, ә көрөсөн йылҡы малының ҡылынан эшләгән", - тип һөйләне Әтек ауылынан Сәғилә Бейембәтова. Һигеҙенсе тиҫтәне уҙған инәй ҡәҙерле станогын хәҙер ошондай ҙур байрамдарҙа йәштәргә күрһәтеү өсөн генә алып йөрөтһә лә, заманында ул һуҡҡан мамыҡ шәлдәр, сағыу балаҫтар, ныҡлы әрмәктәр, таҫтамалдар әле лә ҡулланылыштан сыҡмаған...

Иң төптә үҙ тирмәһен Әбйәлил районынан килеүсе оҫталар ҡуйған. Уларҙың биләмәһе әллә ҡайҙан уҡ "Был районда кейеҙ баҫалар!" тип ҡысҡырып тора. Әбйәлилдәрҙең тирмәһе генә түгел, тотош ихаталары башҡорт халҡының көнкүреше, 1812 йылғы Ватан һуғышы, ырыу тамғалары сағылдырылған кейеҙ балаҫтары менән уратып алынғайны. "Йыл һайын студенттар балаҫ баҫыу серҙәренә беҙҙән килеп өйрәнә, төрлө семинарҙар үткәреп торабыҙ, фестиваль уҙғарабыҙ. Яңыраҡ ҡына 17 сит илдән өйрәнергә теләүселәр килеп, оҫталыҡ дәрестәре үтеп ҡайтты", - ти "Кейеҙ баҫыу йорто"ноң етәксеһе Зөлфирә Мәхийәнова.

Түңәрәкте үлсәп йүгергән сәғәт уҡтары нисәмә быуат арауығын һанап өлгөрөүгә ҡарамаҫтан, башҡорт халҡы түңәрәк тәгәрмәсле ваҡыт арбаһында алға елдергәндә һаман да ата-бабаларынан ҡалған тирмәләрҙе төҙөү серҙәрен онотмаған. "Башҡорт балы - Бөрйән даны" Халыҡ-ара этнофестивале сиктәрендә ҡоролған тирмәләр буйлап йөрөп сыҡҡан ҡунаҡтар башҡорт халҡының матди байлығына ғына түгел, рухи ҡиммәттәренә лә шаһит булды.

### Атайыма ҡарап уйҙым түмәр умарта

Фестиваль башланмаҫ элек үк майҙандың бер яҡ ситендә теҙелешеп ятҡан йыуан-йыуан метр ярымлыҡ бейеклектәге түмәрҙәргә иғтибар итә биреп ҡуйғайныҡ. Баҡтиһәң, солоҡсоларҙың таҫыллығын, етеҙлеген, оҫталығын һынау өсөн әҙерләп ҡуйылған икән улар. Икешәр кешенән торған һигеҙ команда араһында көсөргәнешле ярыш оҙаҡ ҡына барҙы. Һәр конкурсант үҙ эшенең белгесе булараҡ, берәһенә лә беренселекте еңел генә бирергә теләмәне. Шулай ҙа көн төшкә ауышҡансы призлы урындар билдәләнеп, беренсе урынды Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылынан Толомғужин Батыр менән улы Салауат алды. "Инде утыҙ йыл солоҡсолоҡ менән шөғөлләнәм. Бөгөн улым менән түмәр умартаһын бер сәғәт эсендә эшләнек. Беҙҙең ғаиләлә был шөғөл быуындан-быуынға күсә килә, хәҙер үҙемдең дүрт улым бар, өсәүһе минең юлымды дауам итә", - ти Батыр ағай ғорурлығын йәшермәй. Ә бына Басир Мостафиндың уң ҡулы - һигеҙ йәшлек улы Флүр, атаһы солоҡ ағасына менгәндә лә, түмәр умартаһы эшләгәндә лә йүгереп йөрөп ярҙамлашты.

Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән шул. Эште дауам итерҙәй йәш быуын булыуын күреүҙән дә оло бәхет юҡтыр. "Башҡорт балы - Бөрйән даны" Халыҡ-ара этнофестивале нәҡ ошо быуындар араһындағы бәйләнештәрҙе нығытыу, онотолоп барған ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тергеҙеүҙең әһәмиәтен сағылдырҙы.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

**Көнбайыш ҡатайҙарының Ағиҙелдең урта ағымына, Инйәр тамағына күсеп килеүе XIV быуат аҙаҡтарында, Туҡтамыш хан менән Аҡһаҡ Тимер хан араһында Башҡортостандың көнбайышында барған һуғыштан һуң була. Аҙаҡтан ҡатайҙар Инйәрҙең урта ағымын, үрен, Ағиҙелдең үрен үҙләштерә. Ә уларҙың Инйәр тамағындағы ерҙәренә табындар эйә була. 1728 йылда Ҡатай һәм Ҡумрыҡ-Табын улыстары башҡорттары ерҙәрен килешеп, бүлеп сығалар ("полюбовная сказка" тип атала был ер бүлешеү ҡағыҙы).**
**Нуғай юлындағы көнбайыш ҡатайҙар башҡорт халҡы тарихында һиҙелерлек эҙ ҡалдырған. Бигерәк тә был XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорт яуҙары ваҡиғаларында асыҡ сағыла. Был мәҡәләмдә башҡорт халҡының артабанғы йәшәйешенә ҙур йоғонто яһаған 1735-1740 йылдарҙағы яуҙың һуңғы осоро - 1740 йыл миҫалында башҡорт ихтилалдарында ҡатайҙарҙың ҡатнашыуын асыҡларға теләнем. Көлдө үҙ күмәсенә тартыу түгел был, минең теләгем - ырыуҙар бәйләнешен, башҡорт халҡының берҙәмлеген, халыҡтың уртаҡ яҙмышын ҡатайҙар тарихы аша күрһәтеү. Көнбайыш ҡатайҙар ҡайһы бер тарихсылар тарафынан әлегә тиклем айырып күрһәтелмәй, төньяҡ-көнсығыш башҡорт ырыуҙары менән берлектә телгә алына киленде, был күренеш хатта тарихи материалдарҙың картографик өлөштәрендә лә күҙәтелде. И. Гвоздикова ғына Нуғай юлы ҡатайҙарын айырып күрһәтте. Шул арҡала үҙ тарихы менән ҡыҙыҡ һыныусыларҙа тау араһында йәшеренгән ҡатайҙар ил тарихында булып үткән ваҡиғаларҙан бөтөнләй ситтә ҡалғандарҙыр, тигәнерәк фекерҙәр ишетелеп ҡала. Бына ошолар мине ҡулға ҡәләм алырға мәжбүр итте.**

# ҠАТАЙҘАР ҠАРАҺАҠАЛ ЯУЫНДА



### 1740 йылға тиклемге ваҡиғаларға байҡау

Билдәле булыуынса, 1735-1740 йылдарҙа Нуғай юлында яуҙар тоҡанып китә. Яуҙың тәүге осороңа ҡағылған бер документтан башлайыҡ. Мин был тикшеренеүҙәрҙе "Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса материалдар"ҙың (1936 й., беренсе кисәк) һәм "Башҡортостан тарихы буйынса материалдар"ҙың (2002 й., алтынсы том) документтарына нигеҙләнеп яҙҙым. 1737 йылдың 12-13 сентябрендә Ырымбур экспедицияһы тарафынан ошо йылдың 28 июленән 17 сентябренә тиклемге башҡорт ихтилалы ваҡиғалары тураһында төҙөлгән документтың унынсы пунктынан күренеүенсә, майор Люткиндың отряды Өфөнән Табынскийға хәрәкәт иткән йөҙ кешелек баш күтәреүселәр отрядын ҡыйрата. Һуғышта һикһән кеше үлә, өсәүһе генерал-майор Соймоновҡа килтерелә. Шул өсәүҙең береһе Нуғай юлы Ҡатай улысы Мырҙағәле ауылынан Үсенғол (Иҫәнғолдор инде. - **Авт.**) Салыҡов яҙалау аҫтында һөйләгәндәрҙән сығып, ҡатайҙарҙың был яуҙа ихтилалдың тәүге көндәренән үк ҡатнашыуын белеп була. Иҫәнғол, был баш күтәреү Кирилловтың Ырымбур ҡалаһын төҙөүенә ҡамасаулау маҡсатында башланды, 1735 йылда хәрәкәт башында Килмәк абыҙ, Бәпәнә, Үҫәргән улысынан Алгушай, Тамъян улысынан Сәйетбай, Ҡатай улысынан Клевкей (артабанғы документтарҙа Тлевкей - Теләүкәй икәне аңлашыла.- **Авт.**), тағы ла Йәнебәк, Күсекәй торған ике меңлек ғәскәр Вологда полкына һөжүм итте, тип һөйләй. Иҫәнғол үҙе лә был һуғышта була, артабан да байтаҡ бәрелештәрҙә ҡатнашыуын таный. Мәсәлән, Табын ҡәлғәһенән сыҡҡан ылауға һөжүм итеү, күбәләктәрҙең яу етәксеһе Ҡарабай, Тиләүҙән Йәммәт етәкләгән ете йөҙлөк отрядта Юрташ йылғаһы буйындағы "тоғро" башҡорттар ауылдарына һөжүм итеүҙәр... Иҫәнғол һөйләүе буйынса, 1736 йылда Килмәк абыҙҙың һигеҙ меңлек ғәскәре составында генерал Румянцев лагерын ҡыйратыуҙа ла ҡатнаша ҡатайҙар. Иҫәнғол-Үсенғолдоң үҙенең дә ябай башҡорт булмауы төсмөрләнә. 1736 йылда Тамъян улысы Сәйетбай Алкалин янында егерме алты кешелек кәңәшмәлә байтаҡ күренекле кешеләр ҡатнаша: Нуғай юлынан Ҡарабай, Күсәп, Нәҙерғол, Күсәпҡол, Шөгөр һәм башҡа батырҙар менән бергә ҡатайҙарҙан Күсекәй (Ҡуҙыҡай) һәм Иҫәнғол.

Был хәрәкәт сәбәптәре тураһында бер ҡыҙыҡлы документ иғтибарға лайыҡ. Килмәк абыҙ властарға бирелгәс, һорау алыу ваҡытында, башҡорттарҙың властарға ризаһыҙлығы 1732 йылда уҡ башланғайны, тип белдерә. Алдар Иҫәнгилдин шул йылда Утятниковҡа оброк биләмәһе итеп Табын ҡәлғәһе тирәләй урынлашҡан аҫабаларҙың вотчина биләмәләрен биргән була. Ошо ваҡиға айҡанлы Нуғай юлының күренекле кешеләре йыйыны үтә һәм был урманды Утятниковҡа бирмәҫкә, тағы берәйһе заводтар һәм ҡәлғәләр төҙөү маҡсаты менән килһә, яҡын ебәрмәҫкә, тип килешәләр. Йыйында ҡатнашыусылар таралыр алдынан был ҡарарҙар тураһында бер кем дә белергә тейеш түгел, тип иҫкәртеләләр. Ошо турала яҙылған документ Килмәк абыҙҙа һаҡланырға тейеш була (6-сы т., 365-се бит). Йыйында Нуғай юлы Ҡатай улысынан Йәнебәк Унауылов та ҡатнашҡан була.

Башҡорттарҙың Ырымбур ҡәлғәһен һәм Ырымбур нығытмалы һыҙығын төҙөүгә ҡаршы баш күтәреүе ваҡиғаларында ҡатайҙарҙың ҙа ҡатнашҡанын башҡа документтарҙан да белергә була. Өфө воеводаһы Н.Д.Мерзлюкин 1736 йылдың 18 февраль рапортында ихтилал барышы тураһында хәбәр иткәндә ошоларҙы яҙа: "От Катайской волости и от других волостей башкиры ныне в сборе на Зилиме, ...до тысячи человек, которые от Табынска в сороки верстах". Воевода фекеренсә, ҡырҡ меңләп кешенән ғәскәр туплап, уларҙы йәй көнө генә баш күтәреүселәргә ҡаршы ебәрергә булыр ине, ә әлеге шарттарҙа уларҙы ҡыйратыу мөмкин түгел: "конницею за великими снегами не надежно, ибо оные воры башкиры действуют, слезя с коней, на лыжах, и к тому ж приготавливают места оттаптыванием снега". Мерзлюкин баш күтәреүселәрҙе юҡ итеү өсөн бер юлы дүрт яҡтан һөжүм башларға йыйына: беренсе команда Минзәләнән һөжүм итергә, икенсеһе Өфө тирәһендә, өсөнсөһө Көнгөр янында тупланырға, ә дүртенсеһе Теча биҫтәһенән һөжүм итергә тейеш. Уларға өҫтәп, Яйыҡ казактары даланан һөжүм итергә тейеш, ти. (6-сы т., 138-се бит). Был сараларҙа тик 1740 йылдың йәйенә һәм көҙөнә генә тормошҡа ашыра ала хөкүмәт.

Нуғай юлындағы тәүге осорҙоң әһәмиәтле ваҡиғаларынан генерал Румянцев лагерына һөжүм итеүҙе атарға мөмкин, сөнки был һөжүмдән һуң бөтә Башҡортостанда хәрәкәт йәнләнә. Яу башлыҡтары Аҡай Күсемов, Килмәк Нөрөшев, Йосоп Арыҡов, Аҡайҙың улы Абдулла Аҡаевтар властар ҡулына эләккәс тә, һуғыш туҡталмай. Үрҙә иҫкә алынған Сәйетбай Алкалин янындағы кәңәшмәнән һуң Сәйетбай етәкселегендә биш меңләп ғәскәр йыйыла. Улар "тоғро" Бирҙеғол тарханды туҙҙыралар. Ҡатайҙар аҙаҡ Өфө тирәһендәге бер нисә ауылды туҙҙырыуҙа ла ҡатнаша. Был хәл 1737 йылдың яҙында булһа, йәйгә баш күтәреүселәр Килмәк абыҙҙан баш һалырға өндәп яҙылған хат алалар. Хатта Нуғай юлының күренекле кешеләренә мөрәжәғәт итеlә, шулар араһында ҡатайҙан Йәнебәк батыр һәм Күсекәй батыр телгә алына.

**Ринат ШӘЙБӘКОВ,**
**Белорет районы Зәйәк урта мәктәбенең тарих уҡытыусыһы.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Сыуалдың һайғауҙарҙан эшләнгән өҫкө яғы ла тал ҡушып үрелеп йәки һалабаш менән бәйләнеп, балсыҡ менән һылана. Камин эргәһенә ҙур булмаған усаҡ сығарыла, уға төтөн сыҡһын өсөн мөрйә эшләнә (һүрәт). Был - иң ябай мейес. Уның ҡатмарлыраҡ төрө булып таш плитәләрҙән һалынған мейес тора. Ул атап үтелгән сыуалдан әллә ни айырылмаһа ла, ныҡлыраҡ була, уға бер нисә сығынты һәм кәрниз эшләнә; ҡабырғанан уға кәштә ҡуйыла, тыштан мейес аҡбур менән аҡлана (һүрәт). Байыраҡ башҡорттарҙа сыуал кирбестән һалына һәм бик йыш төрлөсә биҙәлә (һүрәт).





Сыуал мейес һәм өй стенаһы араһында буш урын - сыуал алды - ҡалдырыла. Уға мейес яғыу материалдарын, ҡайһы бер ваҡытта яңы тыуған бәрәстәрҙе йәки быҙауҙарҙы урынлаштыралар.



Сыуалдың мейес алдындағы өҫтөнлөгө шунда - ул йорт эсен тиҙ йылыта, уның алдында йыуылған кер тиҙ кибә, шул уҡ ваҡытта ул өй эсен яҡшы елләтә. Камин яғыу өсөн оҙон утын ағасы ҡулланыла. Улар баҫтырып ҡуйыла һәм бик тиҙ янып бөтә. Каминдың йүшкәһе, ҡапҡасы юҡ, шуға күрә ул торлаҡ эсен ағас янған ваҡытта ғына йылыта. Сыуал торлаҡты йылытыу өсөн һәм яҡтылыҡ сығанағы булараҡ файҙаланыла. Ҡаҙан аҫтындағы усаҡ һыу йылытырға кәрәк булғанда ғына, ә камин артындағы мейес икмәк бешереү өсөн яғыла. Мейескә утын сыуалға яҡҡан кеүек оҙон итеп түгел, ә 50-60 сантиметр итеп әҙерләнә. Утын утынлыҡта һаҡлана, ә Урал казактары менән күрше йәшәгән башҡорттар утынды бесән күбәһеләй өйә. Көньяҡ-көнбайыш илан башҡорттары торлаҡты яғып йылытыу өсөн күп итеп тиҙәк әҙерләй.

Башҡорттарҙың торлағын нисек итеп яҡтыртыуы тураһында беҙгә бик аҙ билдәле. Сыраҡ менән яҡтыртыу өсөн ҡулайлаштырылған тимер аса (һүрәт) бик һирәк осраны, ә майлы лампочкаларҙы мин уларҙа бөтөнләй күрмәнем.



Тәүҙәрәк сыуал торлаҡты йылытыу, яҡтыртыу өсөн хеҙмәт итһә, артабан инде башҡорттар яҡтылыҡ сығанағы итеп кәрәсин лампаларын ҡуллана башлай.

Йорт-ҡаралты араһынан ашхананы айырып күрһәтергә мөмкин. Уны шулай уҡ аш-һыу әҙерләнгән аш өйө менән бутарға ярамай. Ашхана бары тик йылы ваҡытта аш-һыу әҙерләү өсөн файҙаланылһа, аш өйө даими торлаҡ булып һанала. Ашхана ҙур булмаған, самандан йәки таштан һалынған, ситәндән үрелгән торлаҡты тәшкил итә. Уның эсендә мейес йәки ҡаҙанлы усаҡ була. Стенаһына кәштәләр эшләнә. Ҡайһы бер урындарҙа бындай ашханаларҙы аласыҡ тип йөрөтәләр.

✓ *Аллаһы Тәғәлә кешегә өс нәмәне тыйған: нығ шатланыуҙы, нығ ҡайғырыуҙы һәм дә асыуланыуҙы. Сөнки шундай мәлдәрҙә кеше менән Аллаһы Тәғәлә араһында пәрҙә барлыҡҡа килә, кеше үҙен-үҙе ҡулға ала алмай, үҙенә үҙе хужа булмай.*



# КЕШЕЛӘРҘЕ һәр кем Аллаһы Тәғәләнең

**Илшат мулла донъялыҡта башҡаларҙан әллә ни айырылмай. Бөгөн уның кеүек тырышып эшләп, ауыл ерлегендә ҡала шарттарына торошло өй һалып, етеш йәшәгәндәр етерлек. Әммә күҙгә бәреп торған матди хәл генә кешенең асылын билдәләмәй шул. Әбйәлил районының Амангилде ауылында йәшәүсе Илшат Баймырҙиндың күңел торошо, рухи байлығы мосолман ҡәрҙәштәребеҙгә үрнәк булырлыҡ. Уны яҡшы белгәндәр, Илшатыбыҙ ғүмер буйы шулай булды, тиҙәр. Шулай булды, тиеүҙәре, асылына тоғро ҡалды, тигәнде аңлаталыр. Илшат мулланың һөйләгәндәрен "Киске Өфө"нө уҡыусыларға ла тыңлатмаҡсы булдым әле.**

## Ике тыуыуға - ике үлем

Дин юлына баҫыуымдың сәбәптәре бала сағыма барып тоташа. Минән алты йәшкә ҙур булған ағайым менән бер бүлмәлә йоҡлай торғайныҡ. Бер көн ул клубҡа кино ҡарарға китте лә һуңлап ҡайтты. Бер үҙем йоҡларға яттым. Йоҡлап ҡына барһам, күҙ алдына шундай хәл килә: үҙемде ҡәберҙә ятҡан кеүек тоям. Ҡурҡып, күҙҙәремде асам. Йоҡомһорай башлаһам, киренән шул күренеш ҡабатлана. Дүрт тарафта дүрт стена, күк йөҙө төҫмөрләнә - мин ҡәберҙә. Шул хәтлем ҡурҡыныс! Хәтерҙә ҡалмаған, бәлки, берәй кешене ерләгәндәрен күргәнмендер. Ағайым ҡайтып ингәс тә илап ебәрҙем (ул хәҙер мәрхүм, ауыр тупрағы еңел булһын). "Ниңә илайһың?" - тип һораны ул. Ҡараңғы, ут тоҡанмаған. "Ағай, кеше үлгәс, уның менән нимә була?" - тип һораным. Мәктәптә уҡып йөрөгәс, ағайымдың тормош тураһында үҙ ҡарашы булғандыр инде. "Кеше үлгәс, уны ерләйҙәр. Аҙаҡ ул ҡәберҙә сереп, тупраҡҡа әйләнә. Тупраҡтан үлән үҫә. Үләнде мал ашай..." - уның һөйләгәндәрен тыңлап ята торғас, йоҡлап киткәнмен. Шуны аңланым: ағайымдың әйткәндәре мине ҡәнәғәтләндерҙе, әммә беҙ ни өсөн был донъяға килгәнбеҙ ҙә, ни эшләп үлеп, юҡҡа сығырға тейешбеҙ, тигән уй һаман борсоно. Күҙ алдына килтерергә маташып ҡарайым, донъя ҡап-ҡара була һәм юҡҡа сыға ла ҡуя. Юҡ, былай булырға тейеш түгел, донъя икенсе төрлө булырға тейеш икәнлеген тоям, әммә аңлата алмайым. Ошо һорауҙарға яуапты мин бик оҙаҡ эҙләнем. Дин юлына баҫҡас ҡына ике тыуыуға ике үлем барлығын төшөндөм. Донъяға килгән бала бер тапҡыр үлеп тыуған кеше. Тәүҙә ул әсә ҡарынында Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән ярала, үҫешә. Бының өсөн уға бөтөн мөмкинлектәр булдырылған. Тәғәйен ваҡыты еткәс, бала был донъяға тыуа. Был донъяға тыуғас, беҙ уны бәләкәй донъяһына кире ҡайтара алмайбыҙ. Ул бәләкәй донъяһы өсөн үлде, был донъяға тыуҙы. Уның әлегә тәне бар, аңы юҡ. Был донъяла ул аҡ менән ҡараны, яман менән яҡшыны айырырға өйрәнә, шулай фани донъяла йәшәй. Тәғәйен ваҡыты үткәс, ул был донъяла үлә һәм әхирәттә тыуа. Тимәк, был донъя икенсе бер донъяға әҙерлек кенә ул.

## Ғәмәлдәребеҙ ҡала

Әсә ҡарыны кеүек, Ер-әсә лә беҙҙе туйындырып үҫтерә. Бөтөн нәмәне лә ерҙән алабыҙ. Өй эшләгән ағасыбыҙ ҙа - ерҙән, һулаған һауабыҙ ҙа - ерҙән. Ер - ул әсә. Беҙ уның ҡәҙерен белергә һәм был донъянан һуң тағы бер донъяға тыуасағыбыҙҙы белеп йәшәргә тейеш. Һәм иң мөһиме - яңынан тыуырға әҙерләнеп йәшәргә тейешбеҙ. Мин быға инанып, киләсәгемә ышаныс менән бағам, донъя бөтөүенән ҡурҡмайым. Шуға күрә, үлем тураһында насар фекерҙә түгелмен. Ғазраил фәрештәне хөрмәт итеп, уға иң ҡәҙерле нәмәбеҙ - йәнебеҙҙе аманат итеп тапшырасаҡбыҙ.

Үлем тураһында уйланыу дингә килеүемдең тәүге сәбәбе булды. Үлемдән ҡасып, йә уны алдап булмай. Беҙҙән алда тыуған күпме аҡыллы кешеләр ҙә, изге кешеләр ҙә, бай кешеләр ҙә, хәйләкәр кешеләр ҙә - береһе лә унан ҡотолоп ҡала алмаған. Шуға күрә, үлемгә әҙерләнергә тейешбеҙ. Ысынында, әҙерләнеү зыяратта ҡәбер ҡаҙып, кәфенлек әҙерләп ҡуйыуҙы аңлатмай. Беҙ ҡылған ғәмәлдәребеҙ менән әҙерләнергә тейеш. Кешене ҡәбергә өс нәмә оҙатып барыр: ул да булһа - туғандары, ул да булһа - донъя малы, ул да булһа - ҡылған ғәмәлдәре, тип әйтелгән бер хәҙистә. Икеһе ҡайта, береһе ҡала. Ғәмәлдәре ҡала. Кеше туғандарын һәм ғүмер буйы туплаған болон үҙе менән бергә алып китә алмай. Ҡылған ғәмәлдәребеҙгә ҡарап, әхирәттә беҙҙән хисап аласаҡтар. Шуға күрә, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанды үтәп, тыйғанынан тыйылып, рәхмәтле булып йәшәргә кәрәк.

***Үлемдән ҡасып, йә уны алдап булмай. Беҙҙән алда тыуған күпме аҡыллы кешеләр ҙә, изге кешеләр ҙә, бай кешеләр ҙә, хәйләкәр кешеләр ҙә - береһе лә унан ҡотолоп ҡала алмаған. Шуға күрә, үлемгә әҙерләнергә тейешбеҙ. Ысынында, әҙерләнеү зыяратта ҡәбер ҡаҙып, кәфенлек әҙерләп ҡуйыуҙы аңлатмай. Беҙ ҡылған ғәмәлдәребеҙ менән әҙерләнергә тейеш. Кешене ҡәбергә өс нәмә оҙатып барыр: ул да булһа - туғандары, ул да булһа - донъя малы, ул да булһа - ҡылған ғәмәлдәре, тип әйтелгән бер хәҙистә. Икеһе ҡайта, береһе ҡала. Ғәмәлдәре ҡала. Кеше туғандарын һәм ғүмер буйы туплаған болон үҙе менән бергә алып китә алмай. Ҡылған ғәмәлдәребеҙгә ҡарап, әхирәттә беҙҙән хисап аласаҡтар. Шуға күрә, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанды үтәп, тыйғанынан тыйылып, рәхмәтле булып йәшәргә кәрәк.***

Бөгөн ҡылған ғәмәлдәребеҙ беҙҙең бөгөнгө йөҙөбөҙҙө тулыһынса сағылдыра микән, тип йыш уйланыла. Минеңсә, тап килеп етеңкерәмәй. Ҡай саҡ насарлыҡ эшләгән кеше лә яҡшы булып күренергә тырыша, яҡшылыҡ эшләгәне насарлыҡ ҡылған кеүек ҡабул ителә. Аҡ менән ҡара төшөнсәләре буталыңҡыраған - элек яҡшы тигәнде хәҙер насар тибеҙ һәм, киреһенсә, элек ҡабул итмәгән нәмәләр бөгөн яҡшы күренә.

## Вәғәҙә - иман

Был донъяла иң бәхетле кеше - башҡаларҙан фәһем алған кеше. Һәр бер есемдең үҙенә күрә исеме була. Атайымдың исеме Мөҙәрис, йәғни дәрес биреүсе. Ул ҡай саҡ эсеп иҫереп, ҡаңғырып та ала торғайны. Шуға, бала саҡтан уҡ фәһем алып, үҙемә һүҙ бирҙем: бер ваҡытта ла ауыҙыма иҫерткес эсемлек алмаясаҡмын. Һүҙемдә торҙом, әммә еңелдән булманы. Ул осорҙа эсмәгән-тартмаған егеттәрҙе егеткә һанамай торғайнылар. Бигерәк тә ҡыҙҙар әсе телле ине. Ҡай саҡ мәжлестәрҙә араҡыны елкәгә ҡойған осраҡтар ҙа булды. Ҡыҫҡаһы, көсләп эсереп маташыусылар әҙ булманы. Техникумда уҡыған осором эскеселектең сәскә атҡан ваҡытына тура килде. Әрмелә хеҙмәт иткәндә һалдаттар наркотик ҡулланыуҙан да баш тартманы, сөнки шундай мөмкинлек бар ине. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте менән был һынауҙарҙы үтә алдым. Кеше бер тапҡыр һүҙ биргәс, һүҙендә тора белергә тейеш, тип уйлайым. Бала саҡта ҡәһәтләнеүем - мин күргәнде минең балалар күрмәһен, тип әйтеү булды. Эскесе атаның балаһы, тигәндең киреһен иҫбат итеп йәшәргә тырыштым.

Кеше үҙенең йәшәү рәүешен дөрөҫ тип таба икән, башҡаларға эйәрергә тейеш түгел. Дин юлына баҫҡас, һаҡал үҫтерҙем. Әсәй мәрхүмә булған көндән ҡырынманым. Мыҫҡыл итеп көлөүселәр булды. Ағас башын ел бора, кеше башын һүҙ бора, тигәнгә ҡарамай, үҙем дөрөҫ тип һанағас, үҙем булып ҡалырға тырыштым. Тормоштағы ауырлыҡтар ҡай саҡ үҙҙәре дөрөҫ юл һайларға этәргес була.

## Уҡығым килде…

Мәҙрәсәлә уҡыу теләге көслө ине. Ваҡыт үтә килде, өйләнгәс, ғаилә мәшәҡәттәре өҫтәлде. Ниңә йәшерәк саҡта ынтылманым икән, тип үкенгән мәлдәр ҙә булды. "Мөхәмәҙиә" мәҙрәсәһенә барыу үҙенән-үҙе килеп сыҡты. Ул мәҙрәсә тураһында уҡығаным бар ине. Бер көн иртәнге ашты ашап ултырғанда, башыма уй килеп, ҡапылғара кәрәкле әйберҙәрҙе төйнәп, ҡатыныма ниәтемде әйттем дә, эшкә лә хәбәр итмәйенсә, Ҡаҙанға сыҡтым да киттем. Был хәл туҡһанынсы йылдарҙың уртаһында булды. Ситтән тороп уҡырға индем һәм Хоҙай Тәғәлә рәхмәте менән тәүге сессияның ике аҙнаһын уҡып ҡайттым. Эштән ҡыуғандарҙыр инде, тип ҡайтып төшһәм, ҡатын: "Һине һораусы ла, белеүсе лә булманы", - ти. Аллаһы Тәғәлә бер нәмәне лә ваҡытһыҙ эшләтмәй икән, һәр нәмәнең үҙ ваҡыты була. Шуға күрә, үткәнгә үкенмәй, киләсәк тураһында Хаҡ Тәғәләнән һорап торорға ғына кәрәк. Сөнки беҙ доға ҡылып, үҙебеҙҙең яҙмышыбыҙға булышлыҡ итә алабыҙ. Доғаның бәрәкәте менән, беҙҙең ниәткә ҡарап, Аллаһы Тәғәлә киләсәгебеҙҙе үҙгәртә.

## Дин - йәшәү рәүеше

Әгәр ҙә ғаиләлә аңлау тапмаһаң, ҡатының дин юлында булыуыңды ҡабул итмәһә, ундай ҡатын менән йәшәмәү хәйерлерәк. Ундай әсәйҙең балаларға йоғонтоһо күберәк булһа, улар ҙа кафырлыҡ юлына баҫыуы ихтимал. Иншаллаһ, ғаиләбеҙҙә аңлау бар. Ғаиләбеҙ менән бергәләп ураҙа тотабыҙ. Эшләмәйенсә тешләп булмай, тигәндәй, Аллаға шөкөр, эш урыным бар. Балаларҙы үҫтереү өсөн дә бит матди хәлдең тотороҡло булыуы мөһим. Әммә быны донъяуи мәшәҡәттәрҙән ҡотолоп булмай, тип аңларға ярамай, сөнки дин йәшәү рәүеше булырға тейеш, уны тормоштан айырып ҡарарға ярамай. Һәр иртәлә Аллаһы Тәғәләне иҫкә алып, көн башлау, һәр эште уға бағышлап башҡарыу - үҙе бер йәшәү рәүеше. Бисмиллаһ менән башланған эштең бәрәкәте килә, тормошҡа йән керә. Был юлды бөтә кешеләр ҙә үтергә тейеш. Мәҫәлән, берәү сүрәләрҙе ятлап ҡына мулла булып китә алмай, һаҡал үҫтереп, түбәтәй кейеү ҙә дин юлына баҫыуҙы аңлатмай. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙ әлегә быны аңлау кимәленә етә алмайбыҙ, дин юлына баҫмауға ҡырылмаһа ҡырҡ һылтау табабыҙ. Теләк булһа, ваҡыты ла табыла, мөмкинлектәр ҙә асыла. Намаҙға баҫҡандар ваҡытты намаҙ уҡыу ваҡытына ҡарап бүлә. Аллаһы Тәғәлә шулай яратҡан: иртән тороп тәһәрәтләнеп, аҙан әйтеп, намаҙ уҡыу үҙе бер шатлыҡ, бәрәкәт. Көндөҙ эшләп, йәнселеп йөрөгәндән һуң тәһәрәтләнеп, таҙарынып намаҙ уҡығанда тән ял итә. Беҙ тәнде лә Аллаһы Тәғәләнән аманат итеп алғанбыҙ. Кискә ҡарай намаҙ ваҡыттары йышая. Былар ҙа кешенең йәшәүен еңеләйтеү өсөн ҡулайлаштырылған. Беҙ был ғәмәлде дөрөҫ файҙалана белергә тейешбеҙ. Ураҙа тотоу ҙа шатлыҡ - тәнгә ял биреү ул. Бындай ҡәнәғәтлекте һәммәбеҙгә лә кисерергә яҙһын, тип теләйем. Мәҫәлән, берәй кешегә насар һүҙ әйткәнһең, йә булмаһа, уның тураһында насар уйлағанһың икән (донъя булғас, төрлө хәлдәр була), намаҙ уҡығанда күңел тыныслана, насар уйҙар ситкә китә. Тән бысранған һымаҡ, күңелебеҙ ҙә бысрана икән, беҙ уны тик намаҙ уҡып ҡына таҙарта алабыҙ. Намаҙға баҫыу был донъяға мөнәсәбәтте ҡырҡа үҙгәртә. Намаҙ уҡыу ваҡыты менән көндө айырым бер тәртипкә һалып ҡарай башлайһың.

## Ниәт

Беренсе тапҡыр ураҙа торорға ниәтләнгәндә әсәйем мәрхүмә: "Ҡуй, улым, ыҙалама, һин тота алмаҫһың ул", - тине. Ни өсөн тигәндә, иртәрәк тороп тамаҡ ашаһам да, төшкә тиклем ашамайынса сыҙамай торғайным. Йә булмаһа, һыуыҡтыҫтан һөт алып йылытып эсәм, йә булмаһа, бер-ике йомортҡа бешереп ашайым. "Юҡ, әсәй, ниәт иткәс, тотоп ҡарайым", - тинем. Беренсе көндө бер нәмә лә һиҙелмәне, асыҡманым да, арыманым да. Бер нәмәне аңланым: кеше ураҙа ваҡытында доға көсө менән йөрөй икән. Ауыҙ асып, намаҙ уҡығайным, бөтөн тәнем янып, хәлем бөттө лә ҡуйҙы. Ә ураҙа тотоуҙың бер ауырлығын да тойманым. Ураҙаны ниәтһеҙ тотһаң, ул ҡоро асығыу ғына була. Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн таң атҡандан ҡояш байығансы ураҙа торорға ниәт ҡылдым, тип, ғәрәпсә йә үҙебеҙҙең телдән ниәт ҡылһаң да була. Ниәтһеҙ ураҙа ураҙа булмай. Ниәт иткәндә генә Аллаһы Тәғәлә еңеллек бирә.

Әлхәмдүлиллаһ, ике тиҫтә йылдан ашыу ураҙа тотам. Өс-

***✓ Был донъяла йәшәйем тип, әхирәтте онотма, әхирәткә әҙерләнәм тип, был донъяны онотма, тиҙәр. Икеһен дә бер тигеҙ тартырға тырышырға кәрәк.***

# ИМАНҒА САҠЫРАМ –

## рәхмәтенә өлгәшһен, әйҙә!

дүрт йыл элек ауырыңҡырап та кителде, әммә ураҙаны шул тиклем ҡалдырғы килмәне. Ауырыған хәлдә лә Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте менән тотоп бөттөм. Аҙаҡтан үҙем ҡыуанып бөтә алманым. Барыһы ла ниәттән тора. Ниәтеңә ҡарап ғәмәлен бирермен, тигән Хоҙай. Әммә ниәтте маҡсат менән бутарға ярамай. Мин, мәҫәлән, ниәт иткәндә үҙемде Аллаһы Тәғәләгә таянып эш иткән кеүек тоям. Финишҡа тиҙ барып етәм, тауға менеп етәм, машина алам тип, маҡсат ҡуйырға булалыр. Тағы хыял төшөнсәһе лә бар. Хыялый кешеләр генә хыяллана һымаҡ, минеңсә. Ниәт кенә дөрөҫтөр, тим. Хыялланыу - бер нәмәгә лә таянмай эш итеү. Нигеҙһеҙ хыял бушлыҡҡа оса, юғары көскә таянып, терәк тойоп ниәтләнгәндә, Аллаһы Тәғәлә үҙе көүәт бирә.

### Шикләнеү - инҡар итеү

Ҡаҙанда уҡыған саҡта аҡшам намаҙынан һуң үтәлә торған бер йола булды: намаҙҙан һуң шәкерттәр үҙе тураһында нимә булһа ла һөйләргә тейеш. Әлмәт ҡалаһынан килгән Хәниф исемле шәкерттең нисек дингә килгәнен һөйләгәне иҫтә ҡалған. Ул баш терапевт булып эшләй ине. Уҡып йөрөгәндә бер хирург: "Ышанаһығыҙмы, юҡмы, ышанмаһағыҙ, моргҡа барып ҡарағыҙ, ир кешенең бер ҡабырғаһы тулмай", - тип әйткән. Башта көлөп, әкиәт һымаҡ ҡабул иткән был. Шулай ҙа аҙаҡ, ҡыҙыҡһынып, моргҡа барған. Ысынлап та, ир кешеләрҙең һул яҡ ҡабырғаһы тулмай икән. Аҙаҡ китаптарҙан да яуап эҙләгән. Шунан ғына, ысынлап та, ҡатын кешенең Әҙәм ғәләйһи үәссәләмдең һул яҡ ҡабырғаһынан яратылғаны буш түгеллегенә ышанып, дин юлынан киткән.

Әлбиттә, төрлө кеше дингә төрлө юлдан: берәү берәй нәмәнән ҡурҡҡандан, икенсе берәүҙәр ата-әсәһенең йоғонтоһона эйәреп килә. Әммә кемгәлер оҡшарға тырышып килеүгә ҡарағанда, Аллаһы Тәғәләнең барлығын һәм берлеген үҙең аңлап килеү яҡшылыр, тим. Доға ҡылып, Аллаһы Тәғәлә ҡабул иттеме-юҡмы тип шикләнһәк, ул доға ҡабул түгел, сөнки беҙ шулай Аллаһы Тәғәләнең иң ҙур сифаттарын юҡҡа сығарабыҙ. Ул беҙҙе күрә, ишетә, белә икәнен инҡар итеү был. Бәндә доға ҡылам тип ҡул күтәргән икән, уның ҡулын буш ҡалдырырға оялам, тигән Аллаһы Тәғәлә. Доғаңда һорағаның бөгөн ҡабул булмаһа, иртән ҡабул булыр, сабырлыҡ кәрәк. Ҡай бер кеше, һораһам да бирмәне, тип шикләнеп, дингә ҡул һелтәп ҡарай башлай. Бәлки, уның әжерен беҙгә әхирәттә биргәне хәйерҙер, сөнки әхирәттең сауабы был донъяныҡына ҡарағанда күп тапҡырҙарға артығыраҡ. Дин - ул ҡағиҙәләр, йолалар үтәү генә түгел бит, йәшәү рәүеше лә. Тулы ышаныу, иман, Аллаһ ишетә, күрә, белә, тип, тулыһынса ҡабул иткәндә генә була. Мәҫәлән, сүллектә китеп барғанда намаҙ ваҡыты етһә, мине бер кем дә күрмәй, намаҙ уҡып тормаһам да була, тип, ғәмәл башҡарылмай икән - ул иман түгел.

### Пәрҙә

Ысынында, Аллаһы Тәғәлә кешегә ысын күңелдән һорағанын бирә. Шуға һүҙҙе уйлап һөйләргә, дөрөҫ ниәт ҡуйып йәшәргә тырышырға кәрәк. Аллаһы Тәғәлә әйткән: "Ниәтеңә ҡарап, ғәмәлеңде яҙырмын". Төптән уйлап, ниәтләнеп йәшәргә тейешбеҙ. Ҡай берҙә ҡыҙыулыҡ менән уйламаған һүҙ һөйләп ташлайбыҙ, ахырын уйламайбыҙ. Һүҙ беҙҙең яҙмышыбыҙҙы үҙгәртеүе лә ихтимал, шуға күрә, һүҙ менән ташланырға ярамай. Аллаһы Тәғәлә кешегә өс нәмәне тыйған: ныҡ шатланыуҙы, ныҡ ҡайғырыуҙы һәм дә асыуланыуҙы. Сөнки шундай мәлдәрҙә кеше менән Аллаһы Тәғәлә араһында пәрҙә барлыҡҡа килә, кеше үҙен-үҙе ҡулға ала алмай, үҙенә үҙе хужа булмай.

### Ысын мосолман

Дин тотмағандарҙы ла беҙ мосолман тип йөрөйбөҙ, әммә улар, ысынында, мосолман була алмай. Мосолман булыр өсөн беҙ Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанды үтәп, тыйғанынан тыйылып, намаҙҙар уҡып йәшәргә тейешбеҙ. Иң беренсе - иман килтереү фарыз. Ураҙа тотоу, зәкәт биреү, хаж ҡылыу терәктәренә таянып йәшәп кенә мосолман булып була. Әгәр ҙә кеше ысын күңелдән ышанып, бер мәртәбә булһа ла: "Әшһәдү әл-ләә иләәһә илләллааһү үә әшһәдү әннә Мөхәммәдән Рәсүлүллаһ", - тип әйтә икән, ысынлап та, Аллаһы Тәғәләнең берлегенә һәм Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи үәссәләмдең рәсүллегенә таныҡлыҡ бирә, үҙен мосолман тип таный. Был ҡоро һүҙ түгел, был - иман килтереү. Әммә иман килтереү генә аҙ, ысын мосолман, ысын дини кеше булыу өсөн уның ҡалған ғәмәлдәрен дә үтәргә кәрәк. Зәкәт биреүҙе, үҙ байлығындан өлөш сығарыуҙы үтәү мотлаҡ.

### Күңел ҡылдары

Бер хәҙис бар: һиңә йөҙ мөфтөй фәтүә бирһә лә, уларҙы тыңлама, күңелеңде тыңла, күңелең һине алдамаҫ. Ысынында, беҙ Аллаһы Тәғәлә менән күңелебеҙ аша тоташҡанбыҙ. Һәр кем кисергәне барҙыр, беҙ ҡайҙалыр күңел тартмай барабыҙ икән, берәй нәмә булып тора. Күңел ҡылдары бик нескә, уларҙы өҙмәҫкә, Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнеште нығытырға тырышырға кәрәк. Күп осраҡта күңел теләмәгәнде лә эшләргә мәжбүрбеҙ. Шуның арҡаһында бәлә-ҡазалар булып тора. Был донъяла йәшәйем тип, әхирәтте онотма, әхирәткә әҙерләнәм тип, был донъяны онотма, тиҙәр. Икеһен дә бер тигеҙ тартырға тырышырға кәрәк. Мәҫәлән, мин әхирәткә әҙерләнәм, тип, намаҙлыҡ өҫтөндә ултырып, доға ғына ҡылам икән, улай дөрөҫ булмай, ғәмәл дә ҡылырға кәрәк. Йә булмаһа, бол туплап, мал йыйып ҡына йәшәһәк, улар был донъяла ҡаласаҡ, сөнки әхирәткә тик ғәмәлдәрҙең әжерҙәрен, сауаптарын ғына алып китәбеҙ.

### Тәүбә

Намаҙ уҡымаған, ураҙа тотмаған, Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡанын үтәп, тыйғанынан тыйылып йәшәмәгән кешене, әлбиттә, әлегә гонаһлы тип әйтеп булмай. Белгән гонаһҡа ҡарағанда, белмәй ҡылған гонаһтарыбыҙ күберәктер ҙә әле. Беҙ бит тәүбәгә килеп, намаҙ уҡыйбыҙ - был буштан-бушҡа түгел. Күңелебеҙҙе таҙартыу өсөн кәрәк ул беҙгә. Изге бәйғәмбәрҙәребеҙ, сәхәбәләр, изге булыуҙарына ҡарамаҫтан, намаҙ уҡығандар, тәүбәгә килгәндәр, ғибәҙәт ҡылғандар. Аллаһы Тәғәлә уларҙы тере саҡтарында уҡ ожмах менән шатландырған хәлдә лә, ожмахлы булдыҡ, тип, түбәгә төкөрөп ятмағандар, киреһенсә, үҙҙәренең ғибәҙәттәрен арттырып, ғәмәл ҡылырға тырышҡандар. Был донъяла берәү ҙә үҙен, мин - изге, мин - гонаһһыҙ, тип әйтә алмай. Уны Аллаһы Тәғәлә Үҙе генә белә. Мәҫәлән, христиан дине буйынса кешеләр сиркәүгә килеп, гонаһтарынан таҙарыныуҙы һорай. Әммә ундайҙар дин әһеленә түгел, уның аша Аллаһҡа мөрәжәғәт итә, сөнки Аллаһ үҙе генә кисерә ала. Беҙҙең, мосолмандарҙың, туранан-тура Аллаһҡа мөрәжәғәт итеү мөмкинлегебеҙ бар икән, уны файҙаланырға, тәүбә намаҙҙары уҡырға тейешбеҙ.

### Диндә көсләү юҡ

Дингә мөкиббән китеп, фанатиктарса бирелеү дөрөҫ түгелдер, тим. Ундай инаныу күп яңылышлыҡтарға алып килә. Хатта енәйәттәргә алып килеүе ихтимал. Диндә көсләү юҡ. Намаҙға баҫырға көсләү ҙә дөрөҫ түгел. Ысынында, Аллаһы Тәғәләне танып, уның ҡушҡанына ышанып баҫҡан намаҙ хәйерлерәк. Көсләп асҡан күҙҙең нуры юҡ, тиҙәр бит. Нурһыҙ имандың бер файҙаһы ла юҡ.

Ысынында, Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡырға кәрәкмәй, беҙ үҙебеҙҙән үҙебеҙ ҡурҡырға, Аллаһы Тәғәлә ҡушмаған ғәмәлде үтәүҙән, яңылыш юлға баҫып китеүҙән ҡурҡырға тейешбеҙ. Аллаһы Тәғәлә мәрхәмәтле, шәфҡәтле, ул беҙгә тик изгелек теләй. Аллаһы Тәғәләнең Әл Ҡәһару кеүек ҡурҡыныс исеме лә бар, әммә Аллаһы Тәғәләне язаһынан ҡурҡып түгел, киреһенсә, Уны хөрмәтләп, ололап ғибәҙәт ҡылып таныу хәйерлерәктер, тип уйлайым. Үҙ балаларыбыҙға ни тиклем һөйөү менән ҡараһаҡ та, сиктән сыҡһалар, шелтәләп ташлайбыҙ бит. Аллаһы Тәғәлә мәрхәмәтле булһа ла, кеше сиктән сыҡһа, ҡазаһын да, язаһын да бирә. Дөрөҫ юлға баҫтырыу өсөн шунһыҙ ҙа булмайҙыр.

### Илаһи нур

Аллаһы Тәғәләне ниндәйҙер сүрәттә күреүҙе дин тыя. Уны һынландырыуға беҙҙең аң етмәй. Үҙемсә мин Аллаһы Тәғәләне яҡты нур һымаҡ тойомлайым. Аллаһы Тәғәләнең туҡһан туғыҙ исеме бар. Миңә иң яҡыны - Нур исеме. Шуға ла үҙемдең малайға, Нурҙың ҡоло булһын, тип, Ғәбдинур тип исем ҡуштым.

### Дәғүәт

Үҙем Аллаһы Тәғәләнең барлығына ышанғас, башҡаларҙы ла ышандырғым килә. Башҡалар ҙа Аллаһы Тәғәләнең барлығына, берлегенә, беҙҙе күреп, ишетеп торғанлығына ышанһын, үләбеҙ ҙә бөтәбеҙ, тип йәшәмәһен ине. "Кешенең йәне бар, ул ожмахҡа йә тамуҡҡа юлыға, ә бына хайуандарға ниндәй яҙмыш?" тип һораған сәхәбәләр Бәйғәмбәребеҙҙән. "Улар тупраҡҡа әйләнер, ә кафырҙар, ниңә тамуҡта быңдай ғазаптар кисергәнсе, хайуандар кеүек, беҙ ҙә тупраҡҡа ғына әйләнмәнек, тиерҙәр", тип яуап биргән Аллаһ Рәсүле. Ҡайҙа ғына булһам да үҙем өсөн дәғүәтте, дингә саҡырыуҙы, төп маҡсат итеп ҡуям. Кешеләр, ысынлап та, үлем юҡ икәнен, үлгәндән һуң тыуабыҙ икәнде аңлаһындар һәм дә бар хәленсә Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанды үтәп, тыйғанынан тыйылып, бәхетле булырға тырышһындар, тим. Шулай, үҙем ышанғанға башҡаларҙы ышандырғым килә. Мәҫәлән, мин еләкле аҡланға килеп сыҡтым икән. Башҡаларҙан йәшермәй, бөтәһен дә шунда саҡырған кеүек, үҙем иман юлына килгәнмен икән, башҡаларҙы ла иманға саҡырғым килә. Улар ҙа Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә өлгәшһен, Ул бит бөтә ниғмәттәрен дә буш бирә, алайыҡ шуларҙы.

### Ваҡыт хаҡы

Әхирәттә беҙҙең һәр бер ағзанан яуап аласаҡтар, ти. Тел нимә һөйләгән, күҙҙәр ни күргән, ҡолаҡтар ниҙәр ишеткән, аяҡтар ҡайҙа йөрөгән, ҡулдар ни башҡарған? Иң ауыр һорау: "Ваҡытыңды нисек үткәрҙең?" тигәне, ти. Был донъяла иң ҡәҙерле нәмә - ваҡыт. Ысынында, дингә баҫһаң, ваҡыт етмәй. Көндө намаҙҙарға, башҡа эштәргә бүлһәң, ултырып телевизор ҡарарға ваҡыт та ҡалмай, көн бәрәкәтле үтә. Ә кемдер берәү ваҡыт үткәреү өсөн кәрт һуға, ләстит һата, йә сериалдар ҡарай икән, ул ваҡытын үлтерә. Киреһенсә, һәр бер минуттың, секундтың, сәғәттең ҡәҙерен белеп, Аллаһы Тәғәләгә яҡынларға тырышып йәшәргә тейешбеҙ - шул саҡта иң ауыр һорауға яуап биреүе еңелерәк булыр. Ғибәҙәт ҡылырға, тәүбәгә килергә, ваҡытлыса булһа ла, донъяның ауырлыҡтарын кисереп булһа ла, был донъяның ҡәҙерен белеп йәшәргә мөмкинлек бирелгәс, беҙ Аллаһы Тәғәләгә хөрмәт йөҙө менән боролоп, киләсәкте уйлап йәшәргә тейешбеҙ.

***Бәндә доға ҡылам тип ҡул күтәргән икән, уның ҡулын буш ҡалдырырға оялам, тигән Аллаһы Тәғәлә. Доғаңда һорағаның бөгөн ҡабул булмаһа, иртән ҡабул булыр, сабырлыҡ кәрәк. Ҡай бер кеше, һораһам да бирмәне, тип шикләнеп, дингә ҡул һелтәп ҡарай башлай. Бәлки, уның әжерен беҙгә әхирәттә биргәне хәйерҙер, сөнки әхирәттең сауабы был донъяныҡына ҡарағанда күп тапҡырҙарға артығыраҡ. Дин - ул ҡағиҙәләр, йолалар үтәү генә түгел бит, йәшәү рәүеше лә. Тулы ышаныу, иман, Аллаһ ишетә, күрә, белә, тип, тулыһынса ҡабул иткәндә генә була. Мәҫәлән, сүллектә китеп барғанда намаҙ ваҡыты етһә, мине бер кем дә күрмәй, намаҙ уҡып тормаһам да була, тип, ғәмәл башҡарылмай икән - ул иман түгел.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ауылдан ҡалаға килеп төпләнгәндәрҙең күбеһе, ауылға ҡайтам, ҡалаға барам, тип һөйләй. Был ғәҙәт ғәләмәте генә түгелдер. Дингә лә килмәйҙәрҙер, ҡайталарҙыр. Әлмисаҡтан бирле килгән асылыбыҙға ҡайтайыҡ, мөхтәрәм ҡәрҙәштәр.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

Ҡорһағы беленә башлағас, оялып, уҡыуын ташланы Ләйсән һәм әсәһенең айныҡта ла, иҫеректә лә эт ашамаҫ һүҙҙәр менән кәмһеткәнен, әрләгәнен, ҡарғағанын тыңлап йомарланып тик ятты. Ярай әле, әлеге Аня әбей йыш ҡына уны инеп алды, йыуатты, ашатты. Бәпәйләргә ауырып киткәс тә шул бәләкәс кенә йүгерәк ҡарсыҡ ярҙам итте. Төнө буйы тотҡан тулғаҡтарҙан хәле бөтөп, ҡан күләүегә эсендә инде һеркелдәп кенә тартҡылашҡан ҡыҙҙы иртәнсәк осраҡлы ғына табып алды ул һәм йәһәтләп сығып, күрше йорттан тиҙ ярҙам саҡыртты. Сабыйы аяҡтары менән килгән икән, саҡ тыуҙырып алырға өлгөрҙөләр...

* * *

Бөгөн ҡыҙын күтәреп ҡайҙа китергә лә белмәй Ләйсән. Аня әбей үҙе балниста ята, йә аҫҡыһын алып ҡалып өлгөрмәгән. Әсәһе тағы ла теге Сашкаһын индергән. Һуңғы бер йылдай шуның менән һуғыша-талаша йәшәп, уныһы бынан өс-дүрт ай элек кенә үҙен ҡап-ҡара итеп туҡмап сығып ҡасҡайны, тағы ла ҡайҙандыр хасил булған. Ул булғанда тынғы юҡ. Эсергә лә әллә ҡайҙан аҡсаһын таба, иҫереп ала ла донъя онтап болара. Тыныслыҡ та, тынғылыҡ та юҡ Ләйсән менән балаһына был көндәрҙә. Ҡосаҡлашып, карауат мөйөшөндә күпме бөршәйешеп ултырырға була? Тән дә тала, ашағы ла килә. Ә тороп йөрөрмөн йәки берәй шәшке сәй эсермен тимә. Төрмәнән төрмәгә йөрөп, тәне наколкалар менән ҡапланған тарамыш ир уға ла берәй нәмә алып елгәрергә күп һорамай.

Сулпанын әүһәләйҙә бәүелтә-бәүелтә уйынан ғына таныштарын барланы. Кемгә барып ҡунырға мөмкин булыр икән? Бала саҡ әхирәте Гөлкәйгә барыр ине, уларға ҡунаҡ килгән, буғай. Анау йорттағы Сания тигән апайҙа ла йыш ҡына йоҡлап сыҡҡылай, тик уныһы кисәле-бөгөнлө күренмәй, тәҙрәһендә лә ут юҡ, берәй ергә киттеме икән... Тағы ла Айһылыу апайға инмәгәндә... Уңайһыҙ инде, малайҙары ҡайтҡан булһа...

Оҙаҡ ҡына йөрөнө урамда Ләйсән. Тик бала менән тағы ла күпме сыҙарға була. Өшөнө лә, асыҡты ла инде сабыйы, мыжый башланы. Ҡараңғы ла ҡуйырғас, бар ҡыйыулығын йыйып, ҡаршылағы ҡыҙыл кирбес йортҡа ыңғайланы. Ҡыҙын ғына туйындырһа... үҙе ашҡа ултырмаҫ, шунда иҙәнендә булһа ла йоҡлатып ҡына сығарһа, таң менән тора һалып китерҙәр. Шулай тип уйлаһа ла, Ләйсән Айһылыу апайҙың ҡыҫтап-ҡыҫтап ашатырын да, йомшаҡҡа һалып йоҡлатырын да, иртәнсәк таңдан торғоҙоп һис сығарып ебәрмәҫен дә белә шул. Шуға ла бигерәк ҡыйынһына. Тик бөгөн башҡа барыр урын да, урамда ҡалыр әмәл дә юҡ...

Барып инһә, Айһылыу апай Асия апай менән икәүләшеп кенә серләшеп, кухняла сәйләп ултыра икән. Асияны күреүгә, үҙ хәленән ер тишегенә инерҙәй булды Ләйсән. Хатта йомош һораған кеше булып сығып китергә иткәйне лә, ауыҙын асып өлгөрмәне, Айһылыу апай килә һалып, ҡыҙын күтәреп тә алды:

- Ҡунаҡ өҫтөнә ҡунаҡ килә миңә бөгөн, әйҙүк.

Үҙе Ләйсәндең һуңғы көндәрҙә йүнле йоҡо ла, ашау ҙа эләкмәгәндән ҡобараһы осоп ағарып киткән борсоулы йөҙөнә һаҡ ҡына ҡарап алғас, йәш ҡатындың кире сығырға уйы барлығын аңлап:

- Үт-үт, уңайһыҙланма, ингәсең кире сығармайым инде, үт давай, - тип бойороп тигәндәй ыңғайлатты.

- Һеҙҙә ҡунаҡ бар икән, белһәм, бимазалап йөрөмәҫ инем... - Ләйсән кәмһенеүҙән илағыһы килеп торһа ла, сытырайып йылмайырға итте.

- Дөрөҫ эшләгәнһең, яңыраҡ ҡына килеп төштөм дә, һиңә иртәнсәк барырмын тигәйнем әле, - Асия махсус ағартылған ынйы тештәрен ялтыратып көлдө. - Бына бит, бирәм тигән ҡолона - сығарып ҡуйған юлына.



Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# БӘЛӘЙ ЕҪЕ

Хикәйә

Хужабикә килеүселәр алдына йылытылған туҡмасын да, һыуытылған тауыҡ итен дә, салатын да ҡуйҙы. Ҡасандан бирле урамда йөрөп асыҡҡан бәләкәсе лә. Ҡош балаһы кеүек ауыҙын асып ҡына тора, ҡаптырып ҡына өлгөр. Ләйсән үҙе лә ашыҡмаҫҡа, бәләкәй генә ҡабырға, аҡрын сәйнәргә тырышып, уңайһыҙланып ҡына тамаҡланды. Оло тәрилкә аштың да яртыһын ғына ашармын тигәйне, күптән һурпа эселмәгән - танһыҡ, ялтыратып ҡуйғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Итенә үрелмәҫкә көс тапҡайны ла, Айһылыу апай киҫәк-киҫәк итеп үҙе һонолоп алдына һалды, икмәген дә көсләп ҡулына тотторҙо. Сәйҙән баш тартып торманы инде, һөтлө, шәкәрле сәйҙе рәхәтләнеп, ләззәтләнеп уртланы.

Хәлен ләм-мим берәү ҙә һорашманы, Айһылыу апай төпсөшә торған кеше түгел шул алай ҙа. Бер уйлаһаң, нимәһен һорашһын инде, былай ҙа белеп-күреп торалыр. Хужабикә балаларының яңылыҡтарын, Асия иһә ҡайҙа нимә күргәнен, нимәләр һатып алғанын һөйләне. Шулай һәүетемсә генә гәпләшеп ултыра торғас, Асия ҡапыл ғына Ләйсәнгә ҡарап:

- Иртән Сулпан менән һине ҡунаҡҡа алып китәм әле үҙебеҙгә, - тимәһенме.

Ләйсән аптырап китһә лә, тәртип йөҙөнән һүҙһеҙ ҡала алманы һәм:

- Ҡу-уй, рәхмәт... Беҙҙең ҡунаҡҡа йөрөр хәл юҡ, - тигән булды.

Асия тыңларға ла телмәне:

- Унын өсөн ниндәй хәл кәрәк? Берәй аҙна ятып, беҙҙең ҡаланы ла күреп ҡайтырһығыҙ, үҙем алып килермен киләһе ялда, - тип хәл ителгәнде хәтерләткән кеүек кенә итеп теҙҙе.

Был апай былай ғына һөйләнгәндер, тиһә, юҡ икән, икенсе көн иртәнге сәйҙе эскәс тә, ауыҙ асырға ла ирек бирмәҫтән, машинаһына тейәп алып сығып та китте уларҙы, ике сәғәттән йортона алып ҡайтып та төшөрҙө. Ултыра хәҙер бына Ләйсән хан һарайы кеүек ике ҡатлы йорттоң ялан шикелле бер бүлмәһендә. "Ошо бүлмә һеҙҙеке була, бына халаттар, кәрәк-яраҡты вис ошонда табырһығыҙ, йыуыныгыҙ, ял итегеҙ ҙә, хәҙер төшкө аш әҙер була", - тип, хужабикә уларҙың үҙҙәрен генә ҡалдырҙы. Бер аҙ йорт йыһаздарын ҡарап ултырып өйрәнгәндәй булғас, ванна бүлмәһенә инде лә хайран булды Ләйсән. Йыуыныу урыны төшөп йөҙмәле, иҙән-түбә-стеналары ялтырап тора. Ҡулдары ирекһеҙҙән үрелеп һыуҙы асты...

Ҡыҙы менән арығансы йыуындылар, тәндәрен һыу һурғансы уйнанылар, ҡоторҙолар. Күптән таста ғына ултыртып, ашыҡ-бошоҡ йыуындырыуға күнеккән бәләкәсе шул ҡәҙәр арыны, әсәһенең кейендергәнен дә көтмәйенсә, таҫтамалға уралған килеш әүен баҙарына юлланды.

Үҙе бер зал шикелле булған аш бүлмәһендәге оҙон өҫтәл артында йомшаҡ халатҡа төрөнөп, берсә алдына ҡуйылған ҡупшы тәрилкәләрҙәге әллә ни төрлө ризыҡтарға, берсә янында бөтөрөлөп йөрөгән яңы әхирәтенә ҡарап, үҙ хәленә үҙе ышана алмай ултыра Ләйсән.

- Әйҙә, һинең килеүең хөрмәтенә, почти ике меңлек вино ул, бик тәмле булырға тейеш, - Асия унын янына ҡунаҡлап, оҙон ботло бокалдарға шарап ҡоя.

- Ой, эсмәйем дә ул мин, Асия апай...

- Эс тимәйем бит мин һиңә, тәмләп ҡара, ауыҙ ит, - үҙе йәһәтләп тәрилкәһенә быҡтырылған итле, бәшмәкле рагу һалды. - Ошо блюдо менән шарап килешә ул, әйҙә, йә, бер-ике йотом...

Харап килеште аҙығы ла, шарабы ла. Саҡ ҡына уртлағайны, ашҡаҙаны йылынып киткәндәй булды, аппетиты асылды. Тәрилкәһе бушауға бокалы ла бушҡәрҙе. Шундай тынысланды, ҡапылдан бер зары ла ҡалмағандай, быға тиклемге ваҡиғалар башҡа берәү менән булғандай тойолдо. Был йорт эсендә бер ҡайғы ла, ҡурҡыныс та юҡ, бар ауырлыҡ тегендә - тышта, ҡалын кирбес стеналар аръяғында булып ҡалды. Ошо бөтөнлөктән, ирәүәнлектән күңеле тулды. Иламаҫҡа серәшеп, алдындағы тәрилкә биҙәктәренә төбәлеп ултыра ине, тып итеп һатлыҡ йәше тәрилкә ситенә тамды, унан икенсеһе тыпылданы. Көлә-көлә нимәлер һөйләп ултырған Асия, туҡталып, берсә тәрилкә ситенән юлаҡ һалып уртаһына ағып төшкән йәш бөрсөгөнә, берсә ҡыҙға ҡараны. Ҡараштың күтәрә алманы ҡунаҡ, түгелеп, һыҡрап илап ебәрҙе.

- Ләйсән... Ләйсәнкәй, нимә булды, аҡыллым?.. - ҡатын үрелеп Ләйсәндең битен ҡаплаған ҡулдарын тотто. - Йә, йә, бөттө... бөттө.

Күҙ йәштәре һуңғы уңайһыҙланыу кәртәһен ағыҙып алып китте, буғай, һыҡтап туҡтағас, Ләйсән дә асылды:

- Һеҙ мине йәлләйһегеҙҙер инде, Асия апай, оят миңә былай хәйерсе шикелле йөрөүе... Тик ҡалайтырға ла белмәйем. Эшкә төшөргә баланы урынлаштырып булмай, әсәйем ҡарарлыҡ түгел шул...

Уны тыңлап бөткәс, Асия һаҡ ҡына һүҙ башланы:

- Аңлайым, аҡыллым, аңлайым. Еңел түгел һиңә. Эшкә төшһәң дә, һөнәрһеҙ көйө күпме генә алаһың инде, ней ашарға, ней кейенергә етмәҫ. Балаң менән йәшәр ер ҙә кәрәк. Хәҙер жилье ҡыйбат, яңғыҙ кешегә хыялланырға ла түгел...

- Ҡуй инде... Бер генә лә өмөт юҡ... Үҙемә ҡул һелтәнем инде мин, ҡыҙымды йәлләйем. Балалыҡ күрмәй, ошо хәйерселектә үҫерен уйлаһам, йәнем әсей.

- Ләйсән... минең һиңә бер тәҡдим бар, - Асия һәр һүҙҙе ентекле һайлап, урынлы ҡуйып ҡына дауам итте. - Әгәр ҙә һин уны ҡабул итһәң, аҡса мәсьәләң дә, торлаҡ мәсьәләң дә хәл ителәсәк. Эскеселәр эргәһендә ыҙалап йөрөмәйәсәкһең, үҙеңә айырым фатир алып, ҡыҙыңды балалар баҡсаһына урынлаштырып, бер зарһыҙ уҡып та сыға аласаҡһың. Унан үҙ ғаиләң дә булыр әле, кем белә, һин бит әле йәшһең, һылыуһың...

Ләйсән йәш тулы аптыраулы күҙҙәрен ҡатынға төбәп, ҡатып ҡалды. "Нимә һөйләй ул?.. Ниндәй фатир?.. Ниндәй уҡыу?.."

- Мин етди һөйләйем, Ләйсән, аптырама улай, - Асия, шаяртып, ҡыҙҙың ҡулдарын һелкетте.

- Апты-тырайым шул...

- Тыңла, минең тәҡдимем шундай. Белеүеңсә, беҙҙең балабыҙ юҡ. Ә ул беҙгә кәрәк, бик кәрәк. Мин үҙем бәпәй таба алмайым. Беҙгә бәпес табып бирә алғандай ҡатын кәрәк, - Асия бер аҙ ғына икеләнде лә, дауам итте, - Әгәр ҙә бына һин шул эшкә риза булһаң, беҙ һиңә фатир һатып алырлыҡ аҡса бирәбеҙ.

Ләйсән һаман да ауыҙын аса алмайынса шаңҡып ултыра бирҙе.

- Ауырлы ваҡытында беҙҙә йәшәрһең, балаң янында, тамағың туҡ, тыныс булыр. Нимә теләйһең, бөтәһен дә алдыңа һалам. Диңгеҙгә алып барып ял иттерермен, теләгәнеңде кейерһең, алырһың... Ә?..

Йәш ҡатын саҡ телен әйләндерҙе:

- Ә... Б-баланы... ҡайҙан алайым һуң мин?..

- Баланы минең һәм иремдең орлоҡтарын яһалма ҡушып, һинең аналығыңа урынлаштыралар. Һин беҙгә ул баланы йөрөтөп, үҫтереп кенә бирәһең була, йәғни, суррогат әсәй инде, аңлашыламы?

- Аң-ңлашыла ла ул... Аптырайым... Ғүмерҙә ундайҙы ишеткәнем юҡ.

- Ләйсән, һин кире ҡағырма ашыҡма әле, йәме. Әйҙә, бер-беребеҙгә ярҙам итәйек, һылыу. Һин урамда йөрөйһөң тигәндәй, бөгөн-иртән ул баракты емереп ырғытасаҡтар, ҡайҙа бараһың? Баландың киләсәген уйла. Һинең беҙгә бала тапҡанынды бер кем дә белмәйәсәк. Ошонда йәшәрһең, бер кем борсомаҫ, табып бирһәң, теләгән ереңә китерһең. Алдарҙар тип һис ҡурҡма, ауырға ҡалыуың менән һинең иҫәпкә аҡса һалып ҡуйырбыҙ. Минең дә хәлемә ин... Балаһыҙ инде иремде тоторлоҡ хәл юҡ, ғаиләм тарҡала...

* * *

Уйларға ваҡыты етәрлек булды Ләйсәндең. Башҡаса был хаҡта һүҙ ҡуҙғатмаһа ла, үҙен хөрмәтләп ҡунаҡ итеп ҡайтарып, бүләк иткән телефонына көн дә шылтыратып хәл белеп торған әхирәт-апайының яуап көткәне билдәле бит. Аҙна ағымында нисек кенә төплө уйларға, аҡыл менән эш итергә тырышһа ла, алама бараҡтан, эскеселәр ояһынан сығып ҡасыу, шул михнәттәрҙән ҡотолоу теләге бик көслө ине һәм был теләк күңеленең ниндәйҙер бер ерен өйкәп торған ҡаршы тойғоларҙы баҫып, томалап ҡуйырға тырышты. Намыҫын еңергә, тынысландырырға теләп, йыш ҡына үҙ-үҙе менән "ирешеп" алып китте.

- Рәхәтме ни миңә? Ҡалайтырға тейешмен ошо хәлдә? Мин бит берәүҙе лә үлтермәйем, урамға бала ҡалдырып китмәйем... Шулай уҡ ауыр хәлдәге кешеләргә ярҙам итәм. Ҡыҙымдың киләсәге... ҡыҙым хаҡына риза булырға тейешмендер, моғайын...

Ыңғай яуап алырын белә ине Асия. Бөгөн булмаһа, иртән. Иртән булмаһа, яҡын киләсәктә. Һәр хәлдә, булыр ине ул яуап. Ыңғай. Һәм хаталанманы ла, тормошто яҡшы белә шул апайың. Бигерәк тә унын әсеһен.

* * *

...Иң ҡиммәтле клиникала йөрөп тикшереү үттеләр. Аҡсаң булғанда һиңә берәү ҙә йөҙ сиреп ҡарарға ҡыймай икән дә. Матур йылмайып, ягымлы һөйләшеп, һәр теләгенде үтәп кенә торалар. Тикшерелгәс, бер аҙ дауаланыу алдылар. Унан төп процедуралар ойошторолдо.

Бик һағайышып, үҙ-ара һөйләшмәй тигәндәй һөҙөмтәләрҙе көттөләр. Тәлғәт борсолоуҙан ҡартайып, ҡарайып китте. Йыш ҡына эштән ҡайтты ла ҡараштары менән Ләйсәнде эҙләне. Быны һиҙеп-күреп йөрөгән Асия: "Һуҡты ла, күпте түгел инде, Тәлғәт, кешеләр икенсе, өсөнсө мәртәбәлә генә саҡ уңышҡа өлгәшә. Сабыр итәйек", - тип, ирен тынысландырырға тырышты.

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

# НУРЛЫ БАЛА САҠТЫҢ...

## осҡонло миҙгеле ул “Байыҡ”



**Халыҡ бейеүе кеүек күңелдә оло хис-тойғолар ҡойоно уятырға һәләтле башҡа сәнғәт төрө юҡтыр ул. Быйыл алтынсы тапҡыр Күгәрсен районының "Мораҙым тарлауығы"нда үткән башҡорт бейеүен башҡарыусы балаларҙың "Байыҡ" республика конкурсы Гала-концертын тамаша ҡылыусылар ошо фекергә тағы бер ҡат инанғандыр, моғайын.**

(Башы 1-се биттә).

### Балалар бәйгеһе ихласыраҡ була

Үҙенсәлекле тел булараҡ, бейеү тәүге һүҙгә ҡарағанда ла иртәрәк барлыҡҡа килгән, тиҙәр. Хәрәкәт аша шатлыҡты ла, хәсрәтте лә, башҡа тойғоларҙы ла асып бирә алыу өсөн ни тиклем ҙур көс һәм һәләт талап ителгәнен профессиональ бейеүселәр яҡшы белә. "Байыҡ" бәйгеһенә йылдан-йыл береһенән-береһе оҫтараҡ бейегән балаларҙың килеүен күргәндән һуң, тәбиғәтте нескә тойған ата-бабаларыбыҙҙан ошо һәләт мул күсҡәнлеген аңлайһың - беҙҙә бөгөн дә бейей белмәгән бер кеше лә юҡ. Был турала үҙебеҙ әллә ни уйланмаһаҡ та, ситтән килгән ҡунаҡтарҙың һәр береһе башҡорт халҡының иҫ киткес зауыҡлы һәм юғары кимәлдә торған мәҙәниәтенә һоҡланыуын йәшермәне. "Байыҡ"та быйыл беренсе тапҡыр ҡатнашыусы Ҡырым Республикаһы делегацияһы етәксеһе, сәнғәт мәктәбе директоры Рима Алексеенко бейеүҙе техник яҡтан башҡарыуҙа балаларҙың хатта профессиональ бейеүселәрҙе уҙып китеүен билдәләне. Өлкәндәр араһында үткән "Байыҡ"тан айырмалы рәүештә, балалар бәйгеһенең күпкә ихласыраҡ үтеүе тураһында Төньяҡ Осетияның "Бонварнон" бейеү ансамбле етәксеһе Алан Габараев та әйткәйне: "Өлкәндәр сәхнәгә сыҡҡан саҡта нисек бейергә тейеш, шулай итеп бейей. Ә балалар, күңеле нисек теләй, бейеүҙе шулай итеп башҡара. Балаларға тәғәйенләнгән саралар бер ҡасан да өлкәндәрҙекенә оҡшамаясаҡ, сөнки бала булған ерҙә ихласлыҡ, хис-тойғолар күберәк була".

Балалар үҙҙәре иһә бер аҙна буйы тарлауыҡ ҡосағында йәшәп, репетицияларҙа тәжрибә туплап, республиканың төрлө төбәктәренән килгән тиҫтерҙәре менән аралашыуҙы ҙур бәхет һанай. Нурлы бала саҡтың матур бер хәтирәһе булып ҡаласаҡ "Байыҡ" бәйгеһе уларҙы ғүмер буйына яҡты усаҡ кеүек йылытып торасаҡ әле.

### Эх, ритайым, ритайым...

Быйылғы "Байыҡ"тың төп үҙенсәлеге булып уның ритайым формаһына ҡоролоуы булғандыр. Был бәйгегә ниндәйҙер еңеллек, күңел күтәренкелеге өҫтәне. Ҡара-ҡаршы тороп, әйтешеп, түңәрәк буйлап бейеүҙәр, боронғо бейеү төрҙәре булараҡ, ҙур йыйындарҙа, байрамдарҙа гел башҡарылған һәм, ғәҙәттә, уйын элементтарынан торған. Йәш быуынды героик шәхестәр өлгөһөндә тәрбиәләү яҡшы күренеш, шулай ҙа бала саҡта уйынкөлкөгә лә ҙур иғтибар бүленеүе мөһимдер ул.

"Балалар араһында ойошторолған бәйгенең ошолай үтеүе һәйбәт, сөнки сәхнәләме ул, башҡа ерҙәме - бала гел шатланырға тейеш. Шуға ла балаларға балаларса бейеүҙәрҙе күберәк ҡуйырға, уларҙы шат йылмайтырға тырышам". Бөрйән районы Байназар ауылынан килгән "Арғымаҡ" өлгөлө балалар ансамбле етәксеһе Айгөл Буранованың фекере менән килешмәйенсә булмай. Был коллектив Рәис Низаметдинов ҡуйған "Байназар таҡмаҡтары" тигән бик матур бейеү алып килгәйне бәйгегә. Айгөл Фәрит ҡыҙы менән ауыл ерендә эшләгән хореографтар тап булған ауырлыҡтар тураһында ла һөйләштек. Бигерәк тә яңы бейеүҙәр һалыу, көйҙәр яҙҙырыу өсөн махсус студиялар булмауы уларҙың бәкәленә һуға. Шулай ҙа халыҡ ижадының юҡҡа сыҡмауында энтузиастарҙың тырышлығы ҙурыраҡ икәнен онотмайыҡ. Һәр район хакимиәтенең мәҙәниәт бүлектәре ярҙам итмәһә, хореографтар үҙҙәре сәхнә өсөн костюм тегә белмәһә, бөгөн "Байыҡ" бәйгеһендә шул тиклем ансамблдәр ҡатнашмаҫ та ине, моғайын.

Әбйәлилдәрҙең "Сулпан" өлгөлө бейеү ансамбленең "Башҡорт сувенирҙары" (етәксеһе - Радик Хәлилов), "Алтынай" өлгөлө бейеү ансамбленең "Ауылым урамдары" (етәксеһе - Ләлә Йәнекәева), Асҡын районынан килгән "Ынйылар" бейеү ансамбленең "Ҡара-ҡаршы" бейеүҙәре (етәксеһе - Гүзәл Ғәләметдинова) үҙенсәлекле таҡмаҡтары, ҡара-ҡаршы әйтештәре менән ритайымға шаянлыҡ төҫө өҫтәне. Иң оҫта коллектив исеменә Баймаҡ ҡалаһының "Ирәндек" халыҡ бейеүҙәре ансамбле лайыҡ булды. Уның етәксеһе Радик Бакиров быйылғы балалар "Байыҡ"на тағы бер еңеүсе тәрбиәләүе менән айырылып торҙо. Егеттәр араһында гран-при "Рекрут" бейеүе өсөн ансамблдең бейеүсеһе Раил Рәхмәтуллинға тапшырылды.

(Дауамы 16-сы биттә).







АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




## ҒАФУРИ МӘҘӘКТӘРЕ

### Ней...

Йәшерен-батырыны юҡ: һәр ҡайһыбыҙ кәрәкле һүҙ таба алмаһаҡ, "ней" тибеҙ ҙә ҡотолабыҙ. Бер шулай колхоз рәйесе булып эшләгән Шәрип ағай ҡыйыҡтан йығылып төшөп иҫәңгерәп ятыуын шулай тип һөйләй икән: "Нейгә менгәйнем, нейттем дә киттем. Эй, нейтеп ятам, эй ятам..."

### Ағиҙелгә "һоп" иткән

Баш осонан күс осоп барыуын күреп ҡалған Кәшфулла ағайҙа һунарсы ҡомары уянған (ни тиһәң дә, "һунарсы ата-бабам") һәм был күс артынан ҡыуа төшкән. Донъяһын онотҡан, хатта ки алда ҙур булып ятҡан Иҙел дә иҫәнән сыҡҡан һәм һыуға сумғас ҡына аҡылына килгән.

### Сәстәре үрә торған

Ауылда иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә эш ҡайнай. Бер шулай "Ағиҙел" колхозында төнөн ике тракторсы ер һөрәләр икән. Арығандарҙыр, йоҡолары килгәндер, ә һөрәһе ер байтаҡ ҡына. Ҡапыл береһенең алдында ялбыр сәсле бер ҡатын пәйҙә була, үҙе ихахайлап көлә. Күҙе шар булған тракторсының туктауы була, теге бисә бейей башлай, шар ҙа шор килеп башҡалары ла килеп сыға. Ҡото осҡан ирҙең бөҙрә-бөҙрә һары сәстәре үрә торә. Нисектәр үҙендә көс табып, тракторынан һикереп төшә лә икенсе тракторсы янына йүгерә. Тракторҙарын гаражға ла ҡуймайынса, туптура ауылға һыпырта былар.

Яңы көн тыуа, төнгө ваҡиға артта ҡала, тик бына торған сәстәр генә ятмай. Муллаға барып, доғалар уҡығас ҡына рәткә килә улар.

### Аҫтындағын эҙләгән...

Шул уҡ колхоздан бер ағай көнө буйы юғалған атын эҙләй. Кермәгән шырлығы, баҫмаған яланы ҡалмай. Әлһерәп, сарсап, хәлдән тайып ҡайта был, йорто тапҡырына еткәс, атынан төшә лә, хайран ҡала: көнө буйы эҙләгән аты аҫтында ғына булған икән.

**Люцыә ЯХИНА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

✓ *Эште яратып башҡарһаң, ул уңышлы була, тип һанайым, юлыңда проблемаларға ла осрамайһың. Тәжрибәмдән сығып, тормош - ул хыялдарҙан һәм уларҙы ысынбарлыҡҡа әйләндереп ҡыуаныуҙан ғибәрәт, тип әйтер инем.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАЛАЛАҒЫ ТАУЫШ...

## һимертә

■ Фолий кислотаһы ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлеге өсөн иң файҙалы элемент, тип иҫәпләй Шотландия ғалимдары. Күп төрлө тестар күрһәтеүенсә, оҙайлы ваҡыт B9 витамины (фолий кислотаһы) ҡабул итеү бөтөн йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарға ла файҙалы. Ғалимдар раҫлауынса, бигерәк тә ауырлы саҡта организмда был кислота етерлек булырға тейеш, сөнки ул арҡа һөйәге менән бәйле проблемаларҙан һаҡлай, нервы системаһының дөрөҫ формалашыуына булышлыҡ итә. Бынан тыш, ул депрессиянан да һаҡлай, шуға ла уны гәзәл рәүештә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн иң мөһим витамин, тип атап йөрөтәләр. Был витамин йәшел төҫтәге йәшелсәләрҙә, ҡара дөгөлә, башҡа ярмаларҙа күп.

■ Кешенең организмы 70 процентҡа һыуҙан тора. Шуға ла кеше көн һайын һыу эсергә тейеш. Шулай ҙа ниндәйҙер сәбәп арҡаһында һыу эсергә яратмайһығыҙ икән, уны емешеләк һәм йәшелсә менән алыштырып була, ти ғалимдар. 90 процентҡа һыуҙан торғанға кәрә, йәшелсә, емеш-еләк ашап, организмды һыуға туйындырырға була. Бигерәк тә ҡыяр, ҡарбуз, ҡауын, баҡса еләге, сельдерей һәм цуккини һыуһынды яҡшы ҡандыра. Улар кеҙәнәктәргә кислород һәм башҡа туҡлыҡлы матдәләр күсерергә ярҙам итә, был иһә тән температураһын нормала тота, кеҙәнәк һәм быуындар өсөн яҡшы яҡшы шарттар тыуҙыра. Һыу организмдан токсиндарҙы йыуып сығара.

